ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 февраль (шаҡай) 2015

№6 (632)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Киләсәккә юл...**

милли мәктәптән башлана



5

**Туған телендә һөйләшкән -**

бәхетенә нигеҙ ҡорған



6

**Театр тамашасы йыя ала икән...**

тимәк, халыҡтың аңы, матурлыҡҡа ынтылышы уяна



8-9

**Яман шеш -**

һуңғы хөкөм түгел



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, беҙҙең менән дуҫлыҡты дауам итеүселәргә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Был юлы ла һеҙгә танһығығыҙҙы, ихтыяжығыҙҙы ҡандырыр, сәмләндерер, рухландырыр мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тип ышандырабыҙ. Тағы шундай мәғлүмәт: 1 февралдән 31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда һәм ташламалы хаҡ (513 һум 72 тин) менән яҙылыу башланды.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйыл йәй баш ҡалабыҙ Өфөлә оло һәм абруйлы йыйын - ШОС һәм БРИКС халыҡ-ара саммиттары буласаҡ. Был турала һеҙ низәр беләһегеҙ?

***Айгөл Хәйбуллина, китапхана хеҙмәткәре:*** Мәҙәниәт, мәғрифәт, мәғлүмәт үҙәге булған урында эшләгән кешегә был хаҡта белмәү оят булыр ине. Китапханала эшләгән өсөн генә лә түгел, мин үҙем, ғөмүмән, ил-йорт хәлдәре, сәйәсәт менән һәр ваҡыт хәбәрҙар булырға тырышам: китапханаға гәзиттәр күп килә, интернеттан да байтаҡ мәғлүмәт алам. Шулай итеп, заман һулышын тойоп, ишетеп-белешеп тормаһаң, үҙенде һуҡыр-һаңғырау итеп тоя башлайһың бит ул. Әле бына йәй баш ҡалабыҙҙа үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттары хаҡында байтаҡ мәғлүмәт тупланым: ошо материалдарҙан күргәҙмә-стенд та эшләп ҡуйҙым. Уны мин аҙна һайын яңыртып, тулыландырып барасаҡмын, сөнки был абруйлы халыҡ-ара йыйын көндәре яҡынайған һайын, яңылыҡтар ҙа күбәйә бара.

Әйткәндәй, үткән аҙнала китап уҡыусы бер пенсионер ағайыбыҙ ошо хаҡта һүҙ башлап ебәрҙе. Дөрөҫөрәге, магазиндарҙағы хаҡтарҙан башланып китте әңгәмә. Ошондай көрсөк мәлендә, йәнәһе лә, ниңә кәрәк икән ул саммит тигәндәре, тип, яраҡан шөғөлө - тәнҡиткә тотонғайны, мин уны тыңлап, ваҡыт әрәм итеп торманым, әлеге мәғлүмәт стенды янына саҡырып, уға шундағы материалдар менән танышып сығырға тәҡдим иттем. Беренсенән, ШОС (Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы) һәм БРИКС (Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ Африка) составына ингән илдәрҙең башлыҡтары, шулай уҡ әлеге илдәр һәм күҙәтеүсе илдәрҙән вәкилдәр, бизнес әһелдәре, журналистар - йыйып ҡына әйткәндә, барлығы 14 меңләп кешенең Башҡортостанға мөһим эш менән килеп төшөүе Өфөбеҙҙөң халыҡ-ара кимәлдә абруйын күтәрәсәк. Ә бит был йыйынды үҙҙәрендә үткәртергә теләгән ҡалалар аҙ түгел ине, ләкин беҙҙең Өфөнө һайлағандар! Тимәк, Башҡортостандың баш ҡалаһы һәр яҡлап лайыҡ, тип табылған. Был иһә уның киләсәге өсөн дә эшләйәсәк бит: Башҡортостанға Ҡытай, Һиндостан, Бразилия, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан кеүек ҙур дәүләттәр менән хеҙмәттәшлеккә, бизнес берҙәмлегенә юл асыласаҡ, бынан һуң беҙ артабан да үҙебеҙҙә юғары кимәлдәге башҡа төрлө сараларҙы ла ҡабул итә аласаҡбыҙ, сөнки бының өсөн Өфөнөң инфраструктураһы юғары талаптарға яуап бирерлек кимәлдә үҫтереләсәк. Ҡалабыҙҙа юлдар, урамдар, йорттар төҙөкләндерелә, ҡунаҡханалар, мәҙәни объекттар төҙөлә. Был сараларҙың бөтәһе лә Башҡортостанға сит ил инвесторҙары өсөн дә юл асасаҡ, тип өмөтләнә етәкселәр. Китап уҡыусы пенсионер ағайыбыҙ ошо материалдарҙы ентекләп уҡып сыҡҡас: "Бик шәп булмаҡсы бит был! Ҡайҙа, күршемә лә еткерәйем был турала, юғиһә, ул да ысынын белеп бөтөрмәй, минең кеүек мығырҙанып ултырмаһын", - тип, йәһәтләп ишеккә ыңғайланы. Бына шулай, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, мәғлүмәтле булыу күп нәмәгә күҙҙе аса. Гәзит уҡыйыҡ, китапхана юлын йышыраҡ тапайыҡ, тип әйтмәксемен.

**(Дауамы 2-сы биттә).**

ШАҒИРҺҮҘЕ




## ӨФӨ АЭРОПОРТЫНДА

*Эркелешеп теҙелешкән ирҙәр,*
*Таблоларҙа яна - Салехард!..*
*Быны күреп низәр әйтер ине*
*Себерҙәрҙән ҡасҡан Сәлих ҡарт?*

*Себерҙәрҙән ҡасып ҡайтҡан бит ул*
*Тыуған иле тиеп, ер-һыуы.*
*Тойоп ята микән ошо бабай*
*Илдә ҡатындарҙың ярһыуын?*

*Белеп ята микән уландары*
*Ят икәнен тыуған ерендә?*
*Себерҙәргә башҡорт киткән һайын,*
*Бәлки, әйләнәләр гүрендә?..*

*Эркелешеп теҙелешкән ирҙәр -*
*Кемдәрҙеңдер ире-атаһы.*
*Их, ҡулыңдан килеп һәр береһен*
*Эшле итеп алып ҡайтаһы...*

*Әҙмәүерҙәй мыҡты ағайҙарым,*
*Һыу һөлөгө кеүек ҡустылар,*
*Ҡарайым, тип, ишле ғаиләләрен*
*Йөрәктәрен усҡа ҡыҫтылар!*

*Аэропортта яугир вариҫтары*
*Яу сыҡҡандай, баҫҡан теҙелеп.*
*Сәфәр һайын милли айбарлыҡ та*
*Яныҡ-һүнә кеүек иң элек.*

*Саралары барҙыр, күреүсе юҡ -*
*Илдән ирҙе һөрә был алым.*
*Эркелешеп теҙелешкән ирҙәр,*
*Таблоларҙа янды - Когалым...*

12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# БЕҘ БӘХЕТЛЕ...
## ошондай гәзитебеҙ менән

**Күрше ауылда йәшәгән ҡустым элек-электән өйөнә күпләп гәзит-журналдар яҙҙыра. Бер урынға туплап барған төпләмәләрен күршеләре генә түгел, барлыҡ ауыл халҡы алып уҡый, тиһәң дә хата булмаҫ. Бер барыуымда ул миңә "Киске Өфө" гәзитен тотторҙо ла "Һин, агай, бөгөн ҡайтмаҫыңды ул", тип, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйҙы. Уның ни өсөн шулай кинәйәләүен гәзитте уҡый башлағас ҡына төшөндөм.**

Ҡараштырып ҡына сығайым, тип ҡулыма алған гәзит шул тиклем мауыҡтырғыс, арбағыс булып сыҡты. Ҡуна ятып та уҡып бөтә алмай, төпләмәһен һорап алып ҡайтып киттем. Ул ваҡиғаға бер-нисә йыл ваҡыт уҙҙы, хәҙер "Киске Өфө"гә үҙем яҙылам. Үҙенең биттәрендә төрлө өлкәгә лә берҙәй урын бүлгән был баҫманы балалар ҙа яратып уҡый. Беҙгә айырыуса "Монолог" һәм "Диалог" рубрикаһында баҫылған мәҡәләләр оҡшай. Унда ҡатнашыусыларҙың теге йәки был темаға, ваҡиғаға һәм һорауға булған ҡараштарын белеү ҡыҙыҡлы. Улар буйынса хатта үҙ-ара бәхәсләшеп тә китәбеҙ.

Мәғарифҡа ҡағылышлы мәҡәләләрҙең йыш баҫылыуы ҡыуандыра. Үҫеп килеүсе быуындың тәрбиәһенә һәм белеменә ҡағылышлы һәр мәҡәлә уҡыусы өсөн генә түгел, ә республикала йәшәүсе һәр кем өсөн файҙалы. Бигерәк тә телгә булған иғтибар һөйөндөрә. Барыбыҙ ҙа үҙенең көндәлек мәшәҡәттәренә күмелеп, матди байлыҡ тураһында ғына ҡайғыртып йәшәгән ваҡытта "Киске Өфө" рухи ҡиммәтебеҙгә - туған телебеҙгә иғтибарҙы йүнәлтә, уға бәйле мәсьәләләр хаҡында аныҡ һәм төплө итеп мәғлүмәт бирә.

Шулай уҡ һуңғы ваҡытта һаулыҡ һаҡлауға бәйле әңгәмәләр йыш баҫылыуы гәзитте тағы ла байытты. Үҙ эштәренең оҫталары, компетентлы белгестәр ауыҙынан әйтелгән һәр һүҙ алтынға бәрәбәр. Әлбиттә, хәҙер күп нәмәне интернет селтәрендә уҡырға мөмкин, ләкин унда медицина теле менән яҙылған күп мәғлүмәтте аңлап бөтөп булмай. Ә бында барыһы ла үҙебеҙсә - аңлайышлы һәм ябай итеп бирелә. Артабан да медицинаның төрлө өлкәһендә эшләүсе аҡ халатлылар сығыштарын гәзит биттәрендә йыш уҡырбыҙ, тип ышанам.

Спорт өлкәһендә оло уңыш ҡаҙанған егет-ҡыҙҙарыбыҙ хаҡында бәйән ителгән мәҡәләләр ҙа уҡымлы. Уларҙың республика, ил һәм хатта донъя кимәлендә яулаған уңыштарын уҡып шатланыу кисерәбеҙ. Мәҙәниәт тураһында үткер һәм актуаль статьялар бирә барыуығыҙ ҙа рухи яҡтан байырға, республикала барған мәҙәни саралар хаҡында хәбәрҙар булырға ярҙам итә. Гәзит биттәрендә тағы ла урман хужалығына бәйле, эшкәртеү сәнәғәте тураһында ла мәҡәләләр күберәк булыуын теләр инем.

Ғөмүмән, гәзиттә баҫылған һәр мәҡәлә - ҙурмы ул, бәләкәйме - уҡыусы өсөн ҡыҙыҡ һәм, иң мөһиме, уйланыуҙар өсөн тема бирә. Тиҙ үтеүсән билдәлелек эҙләмәгән, сенсация артынан ҡыумаған, ә барыбыҙ өсөн дә фәһемле, күрәкле мәғлүмәткә эйә гәзит ул - "Киске Өфө". Беҙ, гәзит уҡыусылар, уға ышанабыҙ, шатлығыбыҙ менән уртаҡлаша алыуыбыҙ менән бәхетлебеҙ. Һәр ваҡыт шулай тәрән аҡыллы, уҡыусылар өсөн яҡшы әңгәмәсе булып ҡалыуығыҙҙы теләйем. Артабан да беҙгә уйланыу өсөн сәбәп булырҙай мәҡәләләрегеҙ менән ҡыуандырығыҙ.

**Зөлфәт ИШЕМҒОЛОВ.**
**Әбйәлил районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйыл йәй баш ҡалабыҙ Өфөлә оло һәм абруйлы йыйын - ШОС һәм БРИКС халыҡ-ара саммиттары буласаҡ. Был турала һеҙ ниҙәр беләһегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Ришат ҒИБАҘУЛЛИН, Учалы районы Миндәк ауыл хакимиәте башлығы:*** ШОС һәм БРИКС илдәре етәкселәренең Өфөлә буласаҡ саммитына халыҡ-ара кимәлдә ҙур әһәмиәт бирелә. Евросоюз менән Америка Рәсәйгә санкциялар менән ҡурҡытырға маташҡан мәлдә ил Президенты Владимир Путин бик дөрөҫ сәйәсәт алып бара: ысынлап та, Ҡытай кеүек күршеләр барҙа, ниңә әле Америка һәм уның ярандары ҡыҫымында тороп ҡалырға? АҠШ ни әйтер, тип, уның "ауыҙына" ҡарап торған Евросоюз күптән Штаттарҙың "штаттан тыш" штаттарына әйләнеп бөткән. Ә Рәсәйҙең үҙ юлы, үҙ сәйәсәте бар. В.Путин әйтеүенсә, "Рәсәй хәҙер сәйәсәт менән иҡтисадты бутамаған, киреһенсә, сауҙа өсөн, технологиялар һәм инвестициялар менән алмашыуға, кешеләргә иркен аралашыуға юл асҡан төбәктәр менән" бәйләнештәрҙе үҫтереү яҡлы. Ә бындай илдәр менән хеҙмәттәшлек тәжрибәһенә бер генә йыл түгел. Быйыл йәй Өфө ҡалаһында үтәсәк сара - ШОС һәм БРИКС илдәре етәкселәренең юғары кимәлдә 15-се тапҡыр осрашыуы. ШОС, БРИКС илдәренең ниәте, НАТО һымаҡ, башҡаларҙың юлын быуыу, сит ерҙәргә хәрби база итеп файҙаланыу түгел, киреһенсә, үҙ киңлектәрендә тыныслыҡ, тотороҡлолоҡ һәм хәүефһеҙлек, иҡтисади хеҙмәттәшлек маҡсаттарын беренсе урынға сығарып, терроргә, сепаратизмға, наркотиктар әйләнешенә ҡаршы бергәләп көрәшеү ул. Бына ошондай тыныслыҡ илселәрен ҡабул итәсәк тә инде Өфө. Уға әҙерлек эштәре, белеүебеҙсә, күптән башланды: яңы ҡунаҡханалар ҡалҡып сыҡты, опера һәм балет театры, "Башҡортостан" дәүләт концерт залы, Нестеров исемендәге музей, "Өфө" аэропорты яңыртып төҙөлә, урамдар, юлдар төҙөкләндерелә һ.б. Башҡортостан ҡунаҡсыллығы менән айырылып тора, был юлы ла һынатмаҫ республикам, тип ышанам. Саммиттарҙың Башҡортостан өсөн дә файҙалы сара буласағына шигем юҡ.

***Регина Зарипова, БДУ студенты:*** Шуныһы ҡыуандыра: Рәсәйҙең ШОС һәм БРИКС илдәре менән емешле хеҙмәттәшлеге беҙҙең Башҡортостан вуздары тормошона ла үтеп инде. Мәҫәлән, бына бер нисә йыл инде беҙҙең Башҡорт дәүләт университетында ҡытай егеттәре һәм ҡыҙҙары күренә башланы. Улар урынына БДУ-нан да Ҡытайҙың юғары уҡыу йорттарына студенттар ебәреп уҡыта башланылар. Мәҫәлән, мин үҙем роман-герман факультетының бер төркөм студенттары составында бер йыл ҠХР-ҙың Ляолинь университетында ҡытай телен өйрәнеп ҡайттым. Шуға күрә ШОС һәм БРИКС саммиттары осоронда ҡунаҡтарҙы хеҙмәтләндереү (тәржемәсе, гид һ.б.) өсөн инглиз һәм ҡытай телдәрен белгән студенттарҙан волонтерҙар курсына иң беренселәрҙән булып яҙылдым. Мәскәүҙән килгән, шулай уҡ үҙебеҙҙең тәжрибәле менеджерҙар саммиттарҙа ҡатнашыусы илдәрҙең тарихы, мәҙәниәте, милли йолалары һәм башҡа үҙенсәлектәрен өйрәнеү буйынса дәрестәр, ҡунаҡтар буласаҡ һәм эшләйәсәк урындарҙа махсус тренингтар үткәрәсәк. Шундай бер нисә дәрес үткәрелде лә инде. Белеүемсә, ҡунаҡтарҙы хеҙмәтләндереү өсөн Өфөнөң 136-сы һөнәрселек лицейында профессиональ официантар әҙерләү курсы ла асылды. Был әҙерлекте үткән кешеләргә ошо һөнәргә үҙләштереү тураһында диплом да биреләсәк, был иһә киләсәктә уларға эшкә урынлашыу мәсьәләһен еңеләйтәсәк. Бына шулай, оло, абруйлы йыйындың баһалап бөткөһөҙ әһәмиәте беҙҙең кеүек бик күп ябай кешеләр тормошонда ла сағылыш табасаҡ һәм уның тик файҙаға ғына булырына иманым камил.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан:**

- Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Ғәлиә Ғәлиуллина, Учалы районы Илсе ауылынан Әлфиә Хәлилова - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**;
- Күгәрсен районы Нуҡай ауылынан Наилә Йәғәфәрова, Сибай ҡалаһынан Нурғәле Юнысов - **"История башкирского народа"**;
- Баймаҡ районы Ярат ауылынан Рәфил Мырҙабулатов, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Гранит Ғиззәтуллин - **Нияз Мәжитовтың "История Башкортостана"**;
- Салауат районы Арҡауыл ауылынан Мөслимә Моғтабарова, Баймаҡ районы Йәрмөхәмәт ауылынан Һиҙиәтулла Мөьминов, Әбйәлил районы Елембәт ауылынан Земфира Ямалетдинова, Йылайыр районы Ҡәҙерша ауылынан Тәнзилә Ҡыҙрасова - **"Антология поэзии Башкортостана"**;
- Шишмә районы Шишмә ҡасабаһынан С. Күҙәшев, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Фәниә Ишбулдина - **Ә. Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**;
- Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Зәлифә Шакирова, Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан Хәмзә Хафизов, Сәйгәфәр ауылынан Фирҙәүес Мырҙабулатова, Ярат ауылынан Әхәт Ҡарамырҙин, Тәскирә Ишембәтова, Шишмә районы Дурас ауылынан Венера Хәйруллина, Учалы районы Кәрим ауылынан Әкилә Йәшелбаева, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Д. Ишмөхәмәтова, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Р. Янбәтова, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Сажиҙә Фәйзрахманова - **башкортса "Дини календарь"**;
- Ишембай районы Ҡанаҡай ауылынан Нәсимә Ғәлина, Дыуан районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, Өфө ҡалаһынан Наилә Закирова, Бөрйән районы Байназар ауылынан Фәнүзә Аҙанғолова, Әтек ауылынан Азамат Хәкимов, Көйөргәҙе районы Түбәнге Бабалар ауылынан Радик Хәлитов, Ғафури районы Юлыҡ ауылынан Нурсилә Ҡаҫҡынова, Саҡмағош районы Саҡмағош ауылынан Музаяна Ғүмәрова, Өфө районы Дмитриевка ауылынан Г. Зиннурова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Сажиҙә Шәрипова, Әбйәлил районы Елембәт ауылынан Венера Исҡужина, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Зилара Низамова - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**,
- Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Рауил Ғәлин - **"Рәми Ғарипов тормошо һәм ижады"**,
- Өфө ҡалаһынан Ф. Нәзершина - **"400 башҡорт халыҡ йыры"** китаптарына лайыҡ булды.

**Ошондай уҡ дәртләндереү сараһы февралдә быйылғы йылдың икенсе яртыһына яҙылыусылар өсөн дә ҡаралған.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓3 февралдә "Берҙәм Рәсәй" партияһы рәйесе, РФ Хөкүмәте башлығы Дмитрий Медведев Башҡортостанға эш сәфәре менән килде. Ул баш ҡала һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә көрсөккә ҡаршы саралар хаҡында кәңәшмә үткәрҙе, Өфө медицина үҙәген һәм Рәсәй Пенсия фондының республика бүлексәһен ҡараны. Бынан тыш, Хөкүмәт Рәйесе "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһе вәкилдәре менән осрашты. Унда ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәргә комплексы ярҙам күрһәтеү, импортты алмаштырыу, һаулыҡ һаҡлау һәм социаль-иҡтисади мәсьәләләр тикшерелде.

✓РФ Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев менән Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың эшлекле осрашыуы үтте. Дмитрий Медведев төбәк иҡтисадындағы, тәү сираттта хеҙмәт баҙарындағы хәл-ваҡиға, төҙөләш темаһы менән ҡыҙыҡһынды. Рөстәм Хәмитов үҙ сиратында РФ Хөкүмәте Рәйесенә торлаҡ төҙөлөшөнә аҡса туплау республика проектына булышлыҡ итеү үтенесе менән мөрәжәғәт итте. Проект республикала һәйбәт үҫешә, аҡса туплау осоро тамамланғас, программала ҡатнашыусылар йылына 6-7 процент өҫтәп түләү шарты менән ипотека кредиты алыу мөмкинлегенә эйә була, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттары етәкселәре, законлар сығарыу йыйылыштары рәйестәре, ҡала мэрҙарының семинар-кәңәшмәһендә ҡатнашты. Осрашыуҙың темаһы - "Заманса иҡтисади һәм сәйәси саҡырыу. Иң яҡшы төбәк тәжрибәләре". Семинар Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың сығышы менән асылды.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Һиндостандың Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Пунди Шринивасан Рагхаван менән осрашты. Һиндостандың республика тышҡы сауҙа тауар әйләнешендәге өлөшө 3 процент (етенсе урын) тәшкил итә. 2014 йылдың 11 айында сауҙа итеү күләме 397,6 миллион доллар тәшкил итте. Башҡортостан Һиндостанға машиналар һәм ҡорамалдар, шул иҫәптән авиация двигателдәре, химия һәм металлургия сәнәғәте продукцияһы һата. Республикабыҙға машиналар эшләү, органик булмаған химия продукцияһы, металл изделиелары индерелә. Башҡортостан биләмәһендә 10 берлектәге предприятие эшләй.

**✓ Кемдәрҙер ерле халыҡтың телен өйрәнеп, етәксе булырға әҙерләнеп йөрөгәндә, республикаға исем биргән аҫаба халыҡтың балалары үҙ телендә уҡыуҙан мәхрүм ителә, ә ата-әсәләр был хәл менән өнһөҙ-тынһыҙ ғына ризалаша.**



КИЛЕШМӘЙЕМ!



# БӘҪЕБЕҘҘЕ СИТТӘР ТҮГЕЛ,

## беҙ үҙебеҙ төшөрәбеҙ, йәмәғәт!

**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы бер һанында "Башҡорт илһөйәрҙәре... Ҡырымда ла башҡорт булып йәшәй" тигән мәҡәләне ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым. Милләттәштәрем был мәҡәләне уҡып, алыҫ Ҡырымда рухыбыҙҙы байраҡ итеп күтәреп, халҡыбыҙҙы данлап йәшәп ятҡан Рәйлә һәм Даларис Имелбаевтарҙан фәһем алыр, бәлки, үҙ телен белеүҙе, балаларына өйрәтеүҙе артыҡ йөк тип ҡарамаҫ, тип уйланым...**

Был мәҡәләне уҡығанда үҙем кисергән ҡайһы бер хәл-ваҡиғалар күҙ алдымдан теҙелеп үтте. 1987 йылда ҡыҙым менән көнбайыш Украинаға, Трускавецҡа, ял итергә барырға тура килде. Мәскәүҙә поезға билет алып, вагонға барып инһәк, туп-тулы сиғандар, беҙҙең урындарға ла ултырып алғандар. Бала саҡтан улар тураһында кире хәтирәләр генә иҫтә ҡалғанлыҡтан, аптырап, ҡаушап ҡалдыҡ. Ҡотой һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә эшләгән йылдарҙа ауылға таборы менән сиғандар килгәйне, һәйбәт итеп тауыҡ кетәктәрен "таҙартып" киткәндәре лә онотолмаған.

Иплән кенә урындарыбыҙҙы бушатыуҙарын һорайым. Сиғандар ҡымшанып та ҡуйманы, минең һүҙҙәремде ишетмәмешкә һалышты. Вагон проводницаһына ярҙам һорап өндәшәм, уныһы ла минә иғтибар итмәне. Сиғандар бар тауышҡа ҡысҡырып һөйләшә, "Пусть все русские сидят на боковушках, около туалета", тиҙәр. Ҡараһам, ысынлап та, аҡ йөҙлә, зәңгәр күҙле кешеләр вагондың ҡабырға яғына ултырып алғандар, ә беҙгә туалет янында ғына урын ҡалған. "Уф, Аллам! Туалет янында урынлашһаҡ, санаторийға ниндәй еҫтәр сығарып барып төшөрбөҙ икән?" - тип борсолоп киттем. Был һүҙҙәрҙе ҡыҙыма башҡортса ҡыҫҡырып әйткәнмен икән. Сиғандар мине ишетеп, тынып ҡалды, бер-береһенә ҡарашты.

-Һеҙ кемдәр?- тип һораны береһе.

Ә мин ғорур ғына:

- Беҙ - башҡорттар, Башҡортостандан киләбеҙ, - тип яуапланым.

Сиғандар шунда уҡ беҙҙең урындарҙы бушатып, үҙ урындарына күсеп ултырҙылар.

- Һеҙ беҙҙән ҡурҡаһығыҙ, эйе бит? Ҡурҡмағыҙ, беҙ насар кешеләр түгел, Мәскәүҙән күсеп итеп килеүебеҙ, - тине бер сиған бисәһе.

-Юҡ, ни эшләп һеҙҙән ҡурҡырға тейешбеҙ, ҡурҡмайбыҙсы, - тигән булам. Санаторийға барып еткәнсе, һәйбәт итеп аралаштыҡ, аҙаҡ дуҫтар булып айырылыштыҡ...

Даларис Имелбаев: "Үҙеңде түбән баһаларға кәрәкмәй. Һәр саҡ юғары кимәлдә булырға һәм шул кимәлдән бер ваҡытта ла төшөргә ярамай", - тип, шул тиклем хаҡ һүҙҙәр әйткән баяғы мәҡәләлә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙ тыуған еребеҙҙә йәшәһәк тә, күптәребеҙ кемдәрҙелер үҙҙәренән артығыраҡ, юғарыраҡ итеп тойоу "сиренән" ҡотола алмай шул әле. Минә оҙаҡ йылдар Учалы ҡалаһы мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары булып эшләргә тура килде, хәҙерге көндә хаҡлы ялдамын. Үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙҙарына:

- Һәйбәт кенә эшләп йөрөйһөң бит, әйҙә, юғары категорияға аттестация үт,- тием.

- Ҡуйығыҙ, тәүҙә Иванова, Петрова, Сидоровалар үтһен дә, шунан мин үтермен, - тип әйтә торғайнылар.

Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған саялыҡ, ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек кеүек күркәм сифаттарҙы ҡайҙа "ерләнек тә", был "меҫкенлек" сирен ҡасан эләктереп алдыҡ икән, тип уйлайым һәр ваҡыт.

1996 йылда Яҙыусылар ойошмаһы, ҡаланың башҡорт теле уҡытыусылары, ата-әсәләр тырышлығы менән бөтөн ҡаршылыҡтарҙы еңеп, Учалы ҡалаһында башҡорт мәктәбе астыҡ. "Һеҙҙең башҡорт мәктәбенә ни бары ун ете генә бала яҙылған, ата-әсәләр балаларын һеҙгә уҡытырға бирергә теләмәй", - тип ҡаршы төшөүселәр булһа ла, шул йылда һигеҙ беренсе класҡа балалар йыйҙыҡ. Ҙур рух күтәренкелеге, дәрт менән эш башлап ебәрҙек. Мәктәбебеҙ - гимназияға, аҙаҡ лицейға әйләнде. 12-се Башҡорт лицейы һәр саҡ алдынғылар рәтендә булды. 2013-2014 уҡыу йылында оптимизация һылтауы менән 1-се дөйөм урта белем биреү мәктәбе менән бергә ҡушып, 12-се Башҡорт лицейын бер һелтәгәндә "ерләп тә" ҡуйҙылар. Хәҙер ул 1-се лицей тип кенә йөрөтөлә. Шул тиклем аптыраным. Лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыларына:

- Беҙ башҡорт мәктәбен асабыҙ тип йөрөгәндә, ҡаланың һәр мәктәбендә ни бары бер генә башҡорт теле уҡытыусыһы эшләй инек. Һеҙ бер армия башҡорт теле уҡытыусылары булып, нинә Башҡорт лицейын яптырырға юл ҡуйҙығыҙ? Еңел генә асылманы бит ул лицей. Ата - әсәләрҙән ҡултамғалар йыйышығыҙ, һинан юллап ҡарайыҡ, - тинем. Коллегаларым тиҙ генә яуап бирмәне. Ике-өс көн үткәс, береһе:

- Мин пенсияламын, әле тағы ла бер-ике йыл эшләйем тигәйнем. Ата-әсәләр менән үҙегеҙ генә эшләгеҙ зә ҡуйығыҙ инде... - тине. Әйтерһең дә, улар пенсияла, ә мин эшләп йөрөйөм. Ошо үҙенде башҡаларҙан түбән күреү, меҫкенлек түгелме һуң?

Өлгәшелгәндәрҙән артҡа сигенмәһәк тә яҡшы булыр ине лә бит. Башҡорт мәктәптәре ябылып бөтөп барғанда, тыуған телебеҙ һағында тороу тураһында ниндәй һүҙ булыуы мөмкин?

Башҡортостан - күп милләтле республика. Һәр милләткә үҙ телен өйрәнергә шарттар булдырылған. Татар, украин, сыуаш һ. б. мәктәптәр эшләй, тип маҡтанабыҙ. Иҫтәлекле саралар үткәрелер булһа, был мәктәптәргә милләттәштәренең хәлен белеп, дәртләндереп торорға күрше республикаларҙан вәкилдәр килеп төшә. Өфө ҡалаһынан бер уҡытыусы һөйләгәне хәтерҙә. Йәһүд балалары уҡыған мәктәпкә милләттәштәре килгән. Шуларҙың береһе балаларҙан:

- Ниндәй телдәрҙе өйрәнәһегеҙ? - тип һораған.

- Рус, инглиз телдәрен өйрәнәбеҙ, - тип яуап биргән балалар.

- Һеҙ рус телен былай ҙа беләһегеҙ, башҡорт телен өйрәнегеҙ. Һеҙ ошо ерҙә йәшәп, етәксе урындарҙа эшләргә тейеш кешеләрһегеҙ. Урындағы халыҡтың телен белеү мотлаҡ, - тип әйткән ситтән килгән ҡунаҡ.

Кемдәрҙер ерле халыҡтың телен өйрәнеп, етәксе булырға әҙерләнеп йөрөгәндә, республикаға исем биргән аҫаба халыҡтың балалары үҙ телендә уҡыуҙан мәхрүм ителә, ә ата-әсәләр был хәл менән өнһөҙ-тынһыҙ ғына ризалаша. Ошо түгелме үҙебеҙҙе кәмһетеүҙең, бәҫебеҙҙе, абруйыбыҙҙы төшөрөүҙең сағыу бер өлгөһө?

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы,**
**Марат Минһажетдинов исемендәге премия лауреаты.**
**Учалы районы.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ИР-АТ АБРУЙЛЫ БУЛҺА...

**Миңзифа ИШЕМҒОЛОВА, Хәйбулла районы "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:** Ил инәһе - ағинәйҙәрҙе борсоған мәсьәләләр бик күп. Оҙон ғүмер юлы үткән, күпте күргән һәм кисергән оло быуын кешеләре "беҙҙең заманда", "беҙ үҫкәндә" тип һөйләргә яратала, заман менән бергә атларға тырышабыҙ. Ә хәҙер ваҡыт шул тиклем шәп үтә, элекке һымаҡ, бөгөн эшләй алманым, иртәгә эшләрмен әле, тип ҡалдырып булмай ниәтләгәнеңде. Ваҡыт арбаһы дилбегәһен үҙ ҡулыңа алып, дөрөҫ юлдан алға елергә лә елергә кәрәк. Аллаға шөкөр, хәҙер зарланып ултыра торған ваҡыттар үтте, эскелек көслө булған осор ҙа ййлап артта ҡала бара. Йәштәребеҙ айыҡ туйҙар үткәрә, халыҡ байрамдарҙы, ҡунаҡтарҙы эскеһеҙ ҡаршылай, айыҡ ауылдар ишәйә. Былтыр Хәйбулла районының ике ауылы "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашты, быйыл өс ауыл ҡатнашырға әҙерләнә. Бик күп ауылдарҙа эскеһеҙ йәшәүгә үтеүенә шатланып бөтә алмайбыҙ. Йәштәребеҙ араһында ла иман юлына баҫыусылар күп, аҡыллы һәм алдынғы ҡарашлылары ла юҡ түгел.

Әлбиттә, замандан артта ҡалмайым, тип, рухи ҡиммәттәрҙе оноторға тейеш түгелбеҙ. Халыҡтың рухи донъяһы - ул милли кейеме, йыр-бейеүе, йолалары ғына түгел. Ул шулай уҡ кешенең тәрбиәһен, тәрбиәттен дә үҙ эсенә ала. Бөгөн беҙ ир-егеттәребеҙҙең эшһеҙлектән ҡул ҡаушырыуын, ғаиләһе йөгөн ҡатынына һалыуын, атай абруйы төшөүен күҙәтәбеҙ икән, тимәк, башҡорт халҡына хас тәрбиә алымдарынан бәҫһеҙләнеүгә килә был. Шулай ҙа, боҙ ҡуҙғалды, тип әйтергә мөмкин. Ауылдарҙа "Ағинәйҙәр ҡоро"на ойошоп, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ошо тәрбиә мәктәбен тергеҙеү эшенә әүҙем тотондо. Ир-егеттәрҙең абруйын күтәреү, буйҙаҡтар проблемаһын ййға һалыу беҙҙең ағинәйҙәрҙең иғтибар үҙәгендә. Ауылда йәшәргә ҡалған егеттәр бигерәк баҫалҡы, улар араһында ғаилә ҡора алмай йөрөүселәр күп. Сөнки хәҙер ҡыҙҙар ауылда тороп ҡалырға бик үк риза түгел, улар шөғөлдәре булмаған кешегә кейәүгә сығырға ла теләмәй. Был хәлдең әҙәмтәһе шул: ауылдарҙа тормош һүнә, балалар һаны кәмей, мәктәптәр ябыла, ауыл хужалығы өлкәһендә эшләүселәр аҙая. Шуға ла беҙ, ағинәйҙәр, райондың никах теркәү органы, "Нур" йәштәр һәм үсмерҙәр клубы менән берлектә димселәр институтын тергеҙергә булдыҡ. Был йәһәттән тәжрибәбеҙ бар, ауылдарҙы ауылдар менән осраштыра башланыҡ. Киләсәктә димселәребеҙ эшмәкәрлеген райондыбыҙҙан ситкә лә сығарып, күрше Йылайыр, башҡа райондарҙан да ир-егеттәребеҙгә - кәләш, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға кейәү эҙләмәксебеҙ. Шулай ҙа димселәр эшен ййға һалыуҙан алда барыбер ҙә ир-егеттәр абруйын күтәреү буйынса күп эштәр башҡарырға кәрәк. Ғаиләлә ата тәрбиәһе алған уландар киләсәген хәстәрләй белгән, тәрбиәле, әхлаҡлы булһа, ҡыҙҙар ҙа бәхетен ситтән эҙләмәс ине, моғайын.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте хеҙмәткәрҙәре республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарында китап йәрминкәһе уҙғара. Йәрминкәләр 10 февралдә - Баймаҡ ҡала мәҙәниәт һарайында, 11 февралдә - Аҫҡар китапханаһында, 12 февралдә Собханғол район мәҙәниәт һарайында ойоштороla.

✓Күгәрсен районында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зәйнәб Биишева исемендәге район әҙәби премияһын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Быйыл уға Әхмәт Искәндәров менән Ғәлиән Хәсәнов лайыҡ булды. Зәйнәб Биишева исемендәге премияны тапшырыу районда Әҙәбиәт йылын асыу тантанаһына тура килде.

✓2015 йылда Башҡортостан мәктәпкәсә белем биреү системаһын модернизациялау 300 миллион һум алаҫаҡ. Аҡсаларҙы балалар баҡсаларында өҫтәмә урындар булдырыуға, мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары өсөн биналар алыуға, балалар баҡсалары биналарын тәҙеүгә, реконструкциялауға һәм төҙәкләндереүгә, шулай уҡ ошо өлкәләге дәүләт ҡарамағында булмаған секторҙы үҫтереүгә йүнәлтергә мөмкин.

✓Өфөлә Ҡышты оҙатыу байрамы (Масленица) 21 һәм 22 февралдә үтә. 21 февралдә Салауат Юлаев исемендәге майҙанда, "Нефтехимиктар" һәм "Беренсе май", "Ҡашҡаҙан" ял парктарында, Дим районының Хәҡикәт урамында һәм Нижегородка биҫтәһендә төрлө саралар ойошторола. 22 февралдә Ҡышты оҙатыу байрамы Өфөнөң Яҡутов исемендәге паркта һәм Искино ҡасабаһында үтә.

✓14 февралдә Өфөлә Халыҡ-ара китаптар бүләк итеү көнөн билдәләйәсәктәр. БР Мәҙәниәт министрлығы Әҙәбиәт йылына арнап "Музейҙарға - һирәк осрай торған китаптар!" акцияһын иғлан итте. Акция барышында республикала йәшәүселәр Башҡортостан музейҙары фондына һирәк осрай торған китаптар бүләк итә ала.

✓Башҡортостанда "Бөйөк Еңеүгә тиклем 100 көн" республика хәйрия марафоны башланды. Ул 9 майға тиклем дауам итәсәк. Сара барышында йыйылған аҡсалар Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына ярҙам күрһәтеүгә һәм уларҙың сәләмәтлеген нығытыуға йүнәлтеләсәк.

**"Башинформ"дан.**

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘРХӘМӘТЛЕК ӨСӨН - утыҙ миллион

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко журналистар менән осрашып, депутаттарҙың уҙған йылғы эшмәкәрлегенә ҡыҫҡаса байҡау яһаны, киләсәккә пландары менән уртаҡлашты һәм бихисап һорауға яуап бирҙе.**

Билдәләнеүенсә, 2014 йыл "Өфө ҡалаһы - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы статусы тураһында" закон проектының, ниһайәт, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан ҡабул ителеүе һәм уның быйыл 6 ғинуарҙан үҙ көсөнә инеүе Өфө өсөн үтә мөһим ваҡиға булараҡ ҡабул ителгән. Әлегә тиклем дә Өфө республиканың баш ҡалаһы булды, унда төрлө мөһим һәм әһәмиәтле, ҙур масштаблы саралар уҙғарылды. Һәм улар, хоҡуҡи база булмағанлыҡтан, ҡала бюджетына өҫтәмә йөк һәм өҫтәмә сығымдар булып ятты. Яңы ҡабул ителгән закон иһә Өфөнөң баш ҡала статусы функцияларын үтәүен финанс яҡтан нығыта. Артабан уның сығымдарының бер өлөшө компенсацияланһа ла, был бик яҡшы буласаҡ.

Евгений Александрович журналистарҙың иғтибарын ҡала бюджетының унышлы үтәлеүенә лә йүнәлтте. Тәүҙә уның килем өлөшө 15 миллиард 980 миллион һум тип раҫланып, бюджет дефициты 900 миллион һум итеп күҙалланһа, йыл һуҙымында ҡала округы хакимиәтенең муниципаль милекте рациональ файҙаланыуы һөҙөмтәһендә һәм юғары кимәлдәге бюджеттан өҫтәмә средстволар алыу мөмкинлеге арҡаһында килем өлөшө 24 миллиард 561 миллион һумға артып, күҙалланған дефицитты 10 тапҡырға арттырып ҡаплау мөмкин була.

Журналистарҙы депутаттарҙың мәрхәмәтлек өлкәһендәге эшмәкәрлеге лә ҡыҙыҡһындырмай ҡалманы, сөнки һәр ултырыш һайын уларҙың ҡайһы берҙәре исеменә хәлыҡтан, төрлө ойошма-учреждение етәкселегенән килгән рәхмәт хаттары уҡыла. Ысынлап та, 2011 йылдан алып ҡарағанда, мәрхәмәтлеккә һалынған аҡса (депутаттарҙың шәхси средстволары) арта бара. 2011 йылда был һан 6 миллион 368 мең һум булһа, 2012 йылда - 13 миллион 623 мең һум, 2013 йылда - 20 миллион 163 мең һум, былтыр - 30 миллион 270 мең һумдан ашыу (былтыр депутаттарҙың береһе мәрхәмәтлек өсөн ҙур сумма - 17 миллион һум бүлә; икенсеһе Ҡырымға ярҙам иҫәбенә миллион һум күсерә). Әммә был әлегә яҡынса ғына, сөнки 36 депутаттың яртыһынан күберәге 2014 йыл өсөн мәрхәмәтлек эшмәкәрлеге буйынса отчетын тапшырмаған әле.

Матбуғат конференцияһы барышында Максимовка биҫтәһендә баш ҡала тәүге Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы ойошторола башлап, һуңынан уның туҡтап ҡалыуы мәсьәләһе лә күтәрелде. "Был эштең нисек барғанына мин үҙем шаһит, уларға документтар пакетын әҙерләү буйынса ярҙам иттем, - тип белдерҙе Евгений Семивеличенко. - Әммә беҙҙә халыҡ бик пассив икәнлеге асыҡланды - документтар пакетын рәсми органдарға алып барып теркәтергә генә ҡалғас, уны ойоштороусы кешеләр был эштең йәмәғәт башланғысында булыуын белеп, артабан әүҙемлек күрһәтмәне. Бәхеткә, хаҡлы ялдағылар, ТЙҮ (ТОС) ойоштороу - ул эш урыны булдырыу, тип уйлап, хаталанған. Йәнәһе, уларға эш хаҡы түләнәсәк. Әммә инде уның йәмәғәт эшмәкәрлеге икәнлеге асыҡланыуы уларҙың дәрт-дарманларын һүндерҙе лә ҡуйҙы".

Депутаттар корпусының 2014 йылдағы эшмәкәрлеге һәм 2015 йылға пландар тураһында ҡала Советы башлығы февралгә планлаштырылған ултырышта ентекләберәк таныштырасаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## АВТОВОКЗАЛ ЯҢЫРА

**2015 йылды Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышын һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтары осрашыуын үткәреүгә бәйле Өфөнөң Көньяҡ автовокзал бинаһын һәм биләмәһен тейешле тәртипкә килтереүгә ҙур иғтибар бирелә. Бынан тыш, объекттың хәүефһеҙлеге буйынса максималь шарттар булдырыу буйынса саралар күрелә.**

Көньяҡ автовокзалда мәғлүмәт технологиялары әүҙем индерелә. Мәҫәлән, пассажир бөтә билеттарҙы ла бер автовокзалда һатып алып, улар буйынса бар республика буйлап йөрөй ала. Автовокзалдар берләшмәһе Рәсәйҙә ошондай хеҙмәттәр күрһәтеүсе берҙән-бер предприятие булып тора. Ҡала яны һәм ҡала-ара маршруттарына билет һатыу пункттарын киңәйтеү буйынса даими эш алып барыла - йәмәғәт транспорты туҡталыштарында һәм халыҡ күп йөрөгән урындарҙа өҫтәмә кассалар асыла. 2014 йылда Өфөлә, Мәләүездә, Ишембайҙа, Нефтекамала ошондай пункттар асылған да инде. Берләшмә эсендә финанс саралары ҡабаттан бүлеү, ҡеүәттәрҙе бер автовокзалға туплау объектта яңы технологиялар һәм заманса материалдар ҡулланып, сифатлы төҙәкләндереү, реконструкция эштәрен башҡарырға мөмкинлек бирә.

## БАҠСАЛАР ЯРЫША...

**Башҡортостандың балалар баҡсалары 2014 йылда Рәсәйҙең 100 иң яҡшы мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары исемлегенә инде. "Киләсәк мәктәбе" Бөтә Рәсәй мәғариф форумы сиктәрендә үткәрелгән конкурс йомғаҡтары буйынса, илдең иң яҡшы балалар баҡсалары исемлегендә республиканың 24 учреждениеһы бар.**

Стәрлетамаҡ ҡалаһын лайыҡлы рәүештә рекорд ҡуйыусы тип атарға мөмкин. Иң яҡшы балалар баҡсаларының һигеҙе - ошо ҡала. Икенсе урында Өфө - исемлеккә 320-се, 220-се, 45-се, 270-се балалар баҡсалары ингән. Иң яҡшылар исемлегендә Нефтекама, Бөрө, Күмертау, Октябрьский, Белорет, Ишембай, Салауат, Межгорье ҡалаларының һәм Шишмә ҡасабаһының балалар баҡсалары ла бар.

## ДИКТАНТ ЯҘЫП ҠАРАЙЫҠ

**Өфөлә йыл да үткәрелгән мәғариф акцияһы штабында "Тоталь диктант" яҙыуға әҙерлек эштәре башланды. "Тоталь диктант" - уҡыйяҙа белеүҙе күтәреүгә һәм яҙыу мәҙәнилеген үҫтереүгә йүнәлтелгән халыҡ-ара акция.**

Үҙҙәрен һынап ҡарарға теләүселәр 18 апрелдә акцияға ҡушыла ала. Өфөлә акция өс майҙансыҡта - Башҡорт дәүләт университетында (Зәки Вәлиди урамы, 32); Өфө дәүләт авиация техник университетында (К.Маркс урамы, 12); ВЭГУ академияһында (М.Рыльский урамы, 9/1) үтә.

2014 йылда акцияла баш ҡаланың 1031 кешеһе ҡатнашты, 41-е "бишле" алды. Диктантты шулай уҡ Салауат, Сибай, Белорет, Стәрлетамаҡ, Нефтекама ҡалаларында һәм Әлшәй районының Раевка ҡасабаһында йәшәүселәр ҙә яҙҙы.

## КЕМ ҺИН, МАТРОСОВ?

**Учалы районының Ҡунаҡбай ауылында Александр Матросовтың ҡаһарманлығына арналған тәүге хәрби-тарихи реконструкция үтәсәк. Акцияны ойоштороуҙа урындағы хакимиәт һәм патриотик берекмәләр ярҙам күрһәтте.**

Унда Учалынан "Бөркөт" эҙәрмән отряды, "Тәүге башҡорт атлы полкы "Любизар" хәрби-тарихи клубы, шулай уҡ Свердловск өлкәһенең Новоуральск ҡалаһынан "Эҙәрмән" һәм Өфөнән "Форвард" клубтары ҡатнаша. Ойоштороусылар билдәләүенсә, реконструкция Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеү алдынан республикала йәштәргә патриотик тәрбиә биреүҙең лайыҡлы өлгөһөнә әүерeләсәк. Сара Учалы районында хәрби-тарихи клуб булдырыуға тәүге аҙым буласаҡ.

Александр Матросов ҡаһармандарса һәләк була - үҙенең күкрәге менән немец амбразураһын ҡаплай. Батырҙың биографияһының ике версияһы бар. Ул 1924 йылдың 5 февралендә Екатеринославта (хәҙер Днепропетровск) тыуған. Рәүеф Насиров фаразлауынса, Александр Матросовтың ысын исеме - Мөхәмәтйәнов Шакирйән Юныс улы. Тикшеренеүсе уның Учалы районының Ҡунаҡбай ауылында донъяға килеүен дәлилләй. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Матросовтың ҡаһарманлығын тағы ла 250-нән ашыу кеше ҡабатлай. Улар араһында дүрт яҡташыбыҙ ҙа була.

## ҠАРҘАН КЕМ ТАҘАРТА?



**Өфө ҡалаһының "Йәмәғәт именлеге үҙәге" муниципаль бюджет ойошмаһы инспекторҙары журналистар менән берлектә баш ҡала территорияһын ҡарҙан таҙартыу һәм тәртиптә тотоуҙы тикшереү буйынса рейд үткәрҙе.**

Рейд барышында шәхси эшҡыуарҙарҙың, ҙур сауҙа үҙәктәре етәкселәренең ҡаланы тәртиптә тотоу буйынса талаптарҙы үтәү нормалары тикшерелде. Тәүге пункт - Комсомол урамындағы "Гөлнара" бөҙрәханаһы. Инспекторҙар рейдта ҡатнашыусылар иғтибарын был территориялағы ҡарҙың ағастар төбөнә өйөлөүенә йүнәлтте. Ҡағиҙә буйынса, шәхси эшҡыуарҙар, ойошмалар ҡарҙы ҡала ситенә сығарыуҙы хәстәрләргә тейеш. Әгәр ҙә быны эшләмәһәләр, тәүге яҙма рәүештә иҫкәртеүҙән һуң, административ штрафтар һалыныуы мөмкин. Ошондай күңелһеҙ хәлдәр килеп сыҡмаһын өсөн һәр етәксе, әгәр ҙә ҡарҙы ҡала ситенә сығарыу өсөн мөмкинлеге булмаһа, коммуналь хеҙмәттәр менән килешеү төҙөргә тейеш. Бөҙрәхана етәкселегенә бындай иҫкәртеү беренсе тапҡыр эшләнгәнгә күрә, инспекторҙар акт төҙөү менән сикләнде. Ә бына иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалмағандарға санкциялар ҡулланыла. Мәҫәлән, рейд барышында бер сауҙа-сервис үҙәгенә һәм ресторанға административ штрафтар һалынды.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың 30 районында һәр фатирҙы йылытыу системаһына күсеү һәм блоклы ҡаҙанлыҡтар ҡуйыу программаһы ғәмәлгә ашырыласаҡ. Программаһы бойомға ашырыу өсөн райондар республика бюджетынан субсидия алыу мөмкинлегенә эйә. Субсидия алыуҙың төп шарттары - хаҡтың 25 проценты күләмендә эштәрҙе өлөшләтә финанслау, килешелгән һәм раҫланған проект документацияһы.

✓Февралдә Башҡортостанда ауыл хужалығы йәрминкәләре эшләй башлаясаҡ. Был сара республиканың аҙыҡ-түлек баҙарындағы хаҡтарҙың үҫеүен туҡтатыуға йүнәлтелгән.

✓Европа ғилми-сәнәғәт палатаһы юғары уҡыу йорттары рейтингын баҫтырып сығарҙы. Рәсәйҙән 100 уҡыу йорто исемлегендә Башҡортостандан да ике вуз бар. Ошо рейтингҡа ярашлы, Өфө дәүләт нефть техник университеты - 36-сы ("ВВВ+" категорияһы), Башҡорт дәүләт университеты 75-се урынды биләй (В+).

✓Өфө үҙәгендә автомобилдәр туҡтау тыйылған зоналар барлыҡҡа килде. Юл хәрәкәтен оптималләштереү һәм Цюрупа, Достоевский, Киров, Чернышевский, Коммунистик, Зәки Вәлиди урамдары киҫелештәрендәге юлдарҙың үткәреү һәләтен арттырыу маҡсатында автомобиль ҡуйыуҙы тыйған юл билдәләре ҡуйылды.

✓Америкала йәшәүсе, бокс буйынса донъя чемпионы, Силәбе өлкәһендә тыуып үҫкән милләттәшебеҙ Хәбир Сөләймәнов "БашГизХан" исемле тарихи китап яҙған. Уның презентацияһы 23 февралдә 12.00 сәғәттә Өфөнөң "Простор" кинотеатрында үтә.

✓Республика буйынса Милли банк Башҡортостан халҡының ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеү статистикаһын анализланы. 2014 йылдың 1 ғинуарынан 1 октябренә тиклем төбәктә тауарҙар һәм хеҙмәттәр өсөн банк карталары менән түләү буйынса 111,9 миллион операция башҡарылған. Был 2013 йылдың ошо уҡ осорона ҡарата 56,7 процентҡа күберәк. Ҡулаҡсаһыҙ түләү хеҙмәте йылдам үҫешә. Республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр күрһәтеү ойошмаларында электрон терминалдар, ситтән тороп түләү терминалдарының һаны ошо уҡ осорға ҡарата 31,8 процентҡа, 30,3 мең берәмеккә артҡан.

*АФАРИН!*

# КИЛӘСӘККӘ ЮЛ...

## милли мәктәптән башлана

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты өсөн быйылғы уҡыу йылы белем усағының 70 йыллыҡ юбилейына арналған саралар менән тағы ла байыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ үтә. 1944 йылда РСФСР-ҙың Халыҡ комиссарҙары Советы ҡарары менән баш ҡаланың 9-сы урта мәктәбе эргәһендә "аҫаба милләт балалары өсөн интернат" булараҡ асылған был мәктәптең тарихы 1922 йылға уҡ барып тоташһа ла, уның рәсми датаһы булып ошо йыл иҫәпләнә. Гимназияның барлыҡ сығарылыш уҡыусылары - республика етәкселәре вәкилдәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, зыялылар үткән аҙнала "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткән тантанала ла ҡатнашты. Уларҙың ҡайһы берҙәренә гимназия-интернат тураһындағы хәтирәләре менән уртаҡлашыуын һорап мөрәжәғәт иттек.**



**Әмир Шамаев, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, профессор, академик:** Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының ошо етмеш йыл эсендә 10 мендән ашыу уҡыусыға төплө белем биреп, оло тормош юлына оҙатыуын, уларҙың һәр береһен халҡына кәрәкле шәхес итеп тәрбиәләүен уйлаһаң, был белем усағының милләтебеҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ әһәмиәтенә төшөнәһең. Әгәр ҙә мин башҡа мәктәптә белем алған булһам, тормошто юғары дәрәжәләргә өлгәшкән бөгөнгө Шамаев була алмаҫ инем. Интернат беҙҙең һәр беребеҙгә киләсәккә юл асты, шуныһы өсөн рәхмәтлемен. Табип - донъялағы иң мәрхәмәтле һөнәр, был сифатҡа ла мине интернат-та өйрәттеләр. "Ҡулыңдан килә икән - ярҙам ит" тигәнде гел күңелемдә тоттом. Беҙҙе шулай тәрбиәләнеләр ҙә, сөнки күбебеҙҙең аталары фронтта һәләк булғайны, бөтөнләй туғандарыбыҙ тороп ҡалғандар ҙа бар ине. Шуға ла интернат беҙҙе дуҫлаштырған, хатта туғанлаштырған да. Интернатты тамамлап, һәр беребеҙ төрлө яҡтарға таралһаҡ та, бер ҡасан да бәйләнеште юғалтманыҡ.

**Флүрә Әхмәтшина-Аралбаева, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:** Мин Советтар Союзы Геройы Ҡәйүм Хәбибрахман улы Әхмәтшиндың ҡыҙымын. Һуғыш бала сағымды урлап, атай менән үҫеү бәхетенән мәхрүм итһә лә, интернатҡа уҡырға килеүемә шатланып бөтә алмайым. Ғүмерем буйына уҡытыусы булып эшләнем, хәҙер хаҡлы ялдамын. Әммә бөгөн дә Хәйбулла районының "Кош юлы" тип аталған үҙешмәкәр коллективында шөғөлләнәм, һаман да сәхнәләргә сығам.

Интернатта Рәми Ғарипов менән бер класта уҡыныҡ, уның менән яҡын дуҫ булдыҡ. Беҙ гел генә өсәүләп - мин, Рәми һәм Сабир Хисамов дәрес әҙерләй торғайныҡ. Математика Рәмигә ауырыраҡ бирелә ине, Сабир уға ошо фәндән ярҙам итер ине. Бер тапҡыр контроль эш мәлендә Рәми: "Ғәфү итегеҙ, ахыры, минең буласаҡ геройҙарым ғына математиканы яҡшы белер", - тип, уҡытыусыға инша яҙып тапшырғайны. Рәми үтә һәҙел булды, уйлағанын ҡурҡмайынса әйтер, башҡаларҙа ла ошо сифатты эҙләр ине. Әҙәбиәтте ныҡ ярата ине. Үҙебеҙ ҙә китаптарҙағы геройҙар кеүек булырға ынтыла инек. Бар нәмәне күңеленә яҡын ала ине ул. Рус әҙәбиәте дәресендә Әминә апай Йыһаншина Горький тураһында һөйләгәндә, ни эшләптер, уның икенсегә өйләнеүе тураһында ла телгә алды. Рәми торҙо ла: "Минең өсөн Горький бөйөк яҙыусы, ә һеҙ уның шундай яҡтарын һөйләп, кире тойғолар уятыуығыҙ мөмкин бит", - тип иҫкәрмә яһаны. Бына ошо хәтирәләр ғүмерем буйына күңелемдә йылытып йөрөнө...

**Фәкил Хәкимов, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре:** Был гимназия-интернатты тамамлауыма 64 йыл ваҡыт үтһә лә, белем алып йөрөгән сағым кисә генә булған кеүек. 1950 йылда сығарылыш уҡыусыларының һаны 105-кә еткәйне, беҙ иң тәүге ҙур класс булдыҡ. Гимназияның бөгөнгө директоры Әлфир Сулпан улы Ғайсинды ололап, директорыбыҙ, тип йөрөтәм. Ул да беҙҙең һәр беребеҙҙе танып-белеп тора, уҡыусылар ҙа беҙгә ихтирам менән ҡарай - былар барыһы ла беҙҙе интернат менән тағы ла ныҡыраҡ бәйләй. Улым Булат та ошо гимназияны тамамлап, хәрби училищела уҡып, 30 йыл илгә хеҙмәт иткәндән һуң, подполковник дәрәжәһендә отставкаға сыҡты. Милләттең киләсәге - белемле кешеләрҙә икәнен аңлап, гимназияла уҡытыу кимәле бик юғары ҡуйылған, гимназия уҡыусыларының йөрәгендә халҡына, бер-береһенә, интернатына сикһеҙ һөйөү тәрбиәләнә - ошолар мине хайран итә. Быңдай уҡыу йорттары күберәк булһын ине.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Кемгә генә мөрәжәғәт итһәң дә, кем менән генә һөйләшһәң дә, 1-се гимназия-интернатҡа ҡағылышлы булған кеше был белем усағына булған рәхмәтен йәшермәй. Шуға ла уның тураһында күпме генә яҙһаң да, гимназияның халҡыбыҙ тормошондағы әһәмиәтен баһалап та бөтөп булмаҫ ине. Ҡасандыр бөйөк педагог К. Ушинский, башҡа милләт өлгөһөндә йәштәргә ярамаған кеүек, сит педагогик системаһы буйынса тәрбиәләнергә лә ярамай, тип хаҡлы билдәләгән. Ниндәй генә тарихи осорҙа йәшәмәһен, был уҡыу йортоноң төп үҙенсәлеге - уның тәрбиә процесын халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәре, йолалары, мәҙәниәте менән үреп алып барыуындалыр, моғайын. Милли мәктәп кенә балаHың киләсәген яҡты хыялдары менән бәйләй ала. Милли мәғарифҡа ҡағылған һорауҙар тыуғанда һәр кемгә ошо хәҡиҡәтте иҫкә төшөрөүҙәрен, ә беренселәргә гел беренселәр булып ҡалыуҙарын теләйек.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ТЕЙЕШҺЕҘ УРЫНДА БУЛҺА...

**Башҡортостанда махсус ҡуналҡаға ҡуйылған машина тәүге 12 сәғәт буйы бушлай һаҡлана. Депутаттар Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында "Башҡортостан Республикаһында транспорт сараларын махсус ҡуналҡаға күсереү, уларҙы һаҡлау, ошоноң өсөн сығымды ҡаплау, шулай уҡ транспорт сараларын кире ҡайтарыу тәртибе тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индереүҙе икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа бер юлы хупланы.**

Раҫланған үҙгәрештәр махсус ҡуналҡала машиналар һаҡлау өсөн түләү системаһына төҙәтмәләр индереүҙе күҙ уңында тота, уларҙы кире ҡайтарыу тәртибен ябайлаштыра һәм машинаны алып китеү факты тураһында хужаларына хәбәр итеү процедураһын регламентлай. Законға ярашлы, әгәр парковкалау ҡағыҙәләрен боҙған автомобиль хужаһы үҙенең машинаһын алып китеүҙәренә шаһит булһа, ул шул урында эвакуатор эше өсөн генә түләй ала. Ҡануниәткә беркетелгән положение буйынса, тротуарҙар, юл билдәләре, йәйәүлеләр үткәүеле эргәһендә, тоннелдәрҙә парковка ҡағиҙәләренә бәйле автомобилде эксплуатациялау, файҙаланыу һәм уның менән идара итеү ҡағиҙәләрен боҙған осраҡта, эвакуацияланған транспорт сараһын кире ҡайтарыуға вәкәләтле вазифалы кешенең яҙма рөхсәте талап ителмәй.

Граждандарға автомобилдәрҙе махсус ҡуналҡаға күсереү тураһында мәғлүмәттәр еткереү маҡсатында махсуслашҡан ойошмалар тәүлек әйләнәһенә эшләүсе белешмә-мәғлүмәт хеҙмәттәре булдырырға йәки ваҡиға тураһында рәсми сайттарында хәбәр итергә тейеш буласаҡ.

Проектта һәр осраҡҡа индивидуаль ҡарарға тәҡдим ителә. Үҙгәрештәр парковкалау ҡағиҙәләрен боҙоуҙарға ҡағыласаҡ. Транспорт сараларын кире ҡайтарыуҙың ябайлаштырылған тәртибе авария яһаған йәки эскән килеш рулгә ултырған осраҡтарға ҡағылмай.

# ХАҠТАРҘЫ КӨЙЛӘҮ КӘРӘК

**Республика прокуратураһы Өфө, Өфө районы магазиндарында һатылған туҡланыу продукттарының, балалар өсөн аҙыҡ-түлектең хаҡтарын тикшерҙе һәм 50-нән ашыу етешһеҙлек осрағын асыҡланы. Тикшереү Монополияға ҡаршы хеҙмәт, Роспотребнадзор һәм Сауҙа буйынса дәүләт комитеты белгестәре ҡатнашлығында 40 сауҙа объектында атҡарылды.**

"ОКей", "Ярмарка", "Альдо" сауҙа селтәрҙәрендә балалар өсөн аҙыҡ-түлек хаҡтарының 100 проценттан юғарыраҡҡа күтәрелеүе асыҡланды. Шулай уҡ ҡулланыусыларҙы алдауҙың айырым осраҡтары ла теркәлде: продукттың кассала түләтелгән хаҡы хаҡтар күрһәткесенән юғарыраҡ булып сыҡты. Йомортҡаларға хаҡты нигеҙһеҙ арттырыу осраҡтары ла билдәләнде, ошо етешһеҙлектәр хаҡында материалдар Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығына ебәрелде.

Тикшереүҙәр дауам итәсәк, улар Рәсәй Федерацияһының Генераль прокуратураһы ҡушыуы буйынса бөтә илдә үҙғарыла. Сауҙа тураһындағы закон буйынса, социаль әһәмиәтле тауарҙар 30 көн эсендә 30 проценттан ашыуыраҡҡа артһа, төбәк хөкүмәте уларға дәүләт көйләүен индерә ала.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сельдерей

Сельдерей үләнен күп сәсегеҙ. Уның һуты аппетитты яҡшырта, ашҡаҙан эшмәкәрлеге көйләнә. Эс ҡатҡанда сельдерей тәнәтмәһен көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. 2 ҡалаҡ ваҡланған сельдерей тамырын 1 стакан һалҡын һыуға һалып, 2 сәғәт тотҡас, һөҙөргә. Был төнәтмәне бөйөр ауыртҡанда, аллергия, дерматит булғанда көнөнә 3 тапҡыр 1-2-әр балғалаҡ эсергә.

### Ҡан туҡтатыу

❖ Быңың өсөн дегәнәк, юл япрағы, һары мәтрүшкә, ҡайын еләге, клевер үләндәре файҙалы - киҫелгән, ҡырҡылған ергә ябаһың.

### Сиҡаҡлау

❖ Шаҡмаҡлы шәкәргә 5 тамсы алма һеркәһе тамыҙып, тиҙ генә тешләп алып йотоғоҙ.

### Йөрәк һау булһын өсөн

❖ 1 ҡалаҡ кипкән әлморон емешен 2 стакан ҡайнаған һыуға һалып, өҫтө ябылған һауытта һүрән утта 10 минут ҡайнатырға. Һыуытып һөҙгәс, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә һәм көнөнә 2-3 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

### Күҙ арыһа

❖ Яңы ғына бешерелгән сәй менән күҙҙәрҙе йыуығыҙ.

❖ Сей картуфты йоҡа ғына итеп телеп, 5 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына һалырға. Һәр кемгә, айырыуса көнө буйы компьютер артында эшләүселәргә бик файҙалы компресс.

### Ашҡаҙандан

❖ 1 балғалаҡ аҡ әнис орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә һәм көнө буйы эсергә.

### Һыу эсегеҙ

❖ Бөйөрҙәр шыйыҡлыҡ менән бергә тәндәге шлактарҙы ла сығара. Әгәр һыу эсмәһәң, шлактар организмда туплана, шуға һыуҙы йыш эсегеҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ул сыбыртҡыһын баш осонда һелкеп, шулай тип һамаҡлай: "Аттар егелгән, ҡойроҡтары төйнәлгән, айыу тун кейелгән, инде ҡуҙғалһағыҙ ҙа була, һау булығыҙ!" Ул төп ҡоҙаның арҡаһына сыбыртҡы менән иплəп кенә һуға.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# АЙЫУ ТУН КЕЙЕЛГӘН...

## ҡайтығыҙ инде!

**Айыу байрамының ҡайһы бер элементтары туй йолаларында һаҡланған. Баймаҡ районында кәләш яғында үткән туйҙың аҙаҡҡы көнөндә ҡыҙҙың ағаһы йәки яҡын туғаны тунды киреһенә әйләндереп кейеп, сыбыртҡысы булып йөрөй. Тундың тышынан билбау бәйләнә, башҡа бүрек кейелә, үләндән йәки һаламдан ишеп эшләнгән сыбыртҡының осона өс ҡыҙыл таҫма тағалар.**

Ул сыбыртҡыһын баш осонда һелкеп, шулай тип һамаҡлай: "Аттар егелгән, ҡойроҡтары төйнәлгән, айыу тун кейелгән, инде ҡуҙғалһағыҙ ҙа була, һау булығыҙ!" Ул төп ҡоҙаның арҡаһына сыбыртҡы менән иплəп кенә һуға, һуңынан һәр ҡоҙа-ҡоҙаса янына бара, улар таҫмаға аҡса бәйләй. Йыйылған аҡса еңгәләргә бирелә, улар табынға сыбыртҡы ашы сығара. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында сеңләү йолаһында айыу булып кейенгән персонаж бар. Һыуға башлау йолаһында тунды әйләндереп, айыу булып кейенгән кеше ҡунаҡтарға "ташланып" йөрөй. Һыу алғанда ул һыу хужаһына әйләнә, уға аҡса биреп, һыуҙы һатып алалар.

Тәүбабаҙ булараҡ, айыу ҡатын-ҡыҙҙың бала табыу һәләтенә йоғонто яһай, яңы тыуған сабыйҙарҙы һаҡлай, тигән ҡараш та йәшәй. Бөрйән башҡорттары түлһеҙ ҡатынды айыу иренә аша үткәргән, Белорет һәм Йылайыр райондарында ишек өҫтөнә ҡағылған айыу тырнағы баланың үҫешенә ыңғай тәьҫир итә. Йылы һыуға һалғас, ебеп, һығылмалыға әүерелгән айыу тырнағын балаяткының асылыуына оҡшатып, был сара бала тыуыуҙы тиҙләтә, тип ышанғандар. Бына шуның өсөн дә һәр ҡатын-ҡыҙға айыу тырнағы булырға һәм ул уны һаҡлаусы итеп йөрөтөргә тейеш булған. Бала ауыр килгәндә бала тапҡан ҡатындың биленән өс тапҡыр айыу тырнағы менән йөрөткәндәр, бер уҡ ваҡытта доғалар уҡылған. Баланы ен-пәрейҙәрҙән һаҡлау өсөн сәңгелдәккә айыу тырнағы элеп ҡуялар. Ошо уҡ маҡсатта бала тыуған йортта айыу тиреһе яндырыла, яҫтыҡ аҫтына айыу тиреһе киҫәге һалына.

Әгәр ҙә бала насар йоҡлай, һаташа, илай икән, Бөрйән районында айыу һөйәгенә ут төртөп, төтөнөн балаға еҫкәтәләр. Хәйбуллала баланың арҡаһына айыу тырнағы менән һыҙалар. Ҡыҙамыҡ ауырыуынан айыуҙың үт ҡыуығына һыу өҫтөп эсергәндәр. Бүҫер ваҡытында күкрәк һөтөнә үт ҡыуығы өҫтәп, эскәндәр. Көмбә (йүткерек) мәләндә муйынды һәм арҡаны шулай уҡ үт ҡыуығы менән майлағандар. Үт ҡыуығы балалар ауырыуҙарын ғына түгел, өлкәндәрҙең сирҙәрен дауалағанда ла ҡулланылған. Зыяндаш, быума (эпилепсия), үпкә сирҙәре, ашҡаҙан, бауыр ауырыуҙары, күҙгә аҡ төшкәндә үт ярҙамға килгән. Тән һыҙлауынан айыу ите файҙалы, тип иҫәпләгәндәр. Быума мәлендә айыу тырнағына, һөйәгенә ут төртөп, уның менән ауырыуҙы ыҫлағандар, төтөнөн еҫкәткәндәр. Беҙҙәк менән ауырыған кешене айыуҙың тиреһенә урағандар. Ауырыу, айыуҙан ҡурҡып, тәндән сығып ҡасырға тейеш булған.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова. "Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан. (Дауамы бар).**

*БАЛАЛАР ҠОРО*

**Баш ҡалабыҙҙа тиҫтәләп башҡорт балалар баҡсаһы уңышлы эшләп килә. Совет районының 249-сы башҡорт балалар баҡсаһы етәксеһе Алһыу Буранбаева әйтеүенсә, был учреждениеға ҡаланың ошо өлөшөндә йәшәүсе башҡорт ғаиләләре балаларын алып килә. "Әлеге көндә балалар баҡсаһының ике төркөмөнә бөтәһе 60 бала йөрөй. Беҙҙә эшләүсе тәрбиәселәр бөтәһе лә башҡорт телендә яҡшы һөйләшә, шуға күрә, килгәндә туған телендә бик матурлап аралаша белмәгән балаларҙың да йәйләп телдәре башҡортса асыла башлай. Улар бында тиҙәйткестәр, йырҙар өйрәнә, йомаҡтар ҡоя, тәрбиәселәр уларҙы көн һайын башҡорт халыҡ әкиәттәрен уҡып йоҡлата, мәҡәл-әйтемдәр ярҙамында тәртипкә өйрәтә. Үҙебеҙҙең милли уйындарҙы уйнатып, йолаларҙы өйрәтеп тәрбиәләргә тырышабыҙ. Әйтергә кәрәк, беҙҙең тәрбиәләнеүселәр йыл да "Һаумы, һаумы әкиәт!" кеүек кескәйҙәр араһында үткәрелгән төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнаша, "Тамыр" балалар студияһы түңәрәктәрендә шөғөлләнеүселәр бар, үҙебеҙҙең ҡурай түңәрәгенә лә бик теләп йөрөйҙәр. Тағы ла бер шатлыҡлы яңылығыбыҙ менән уртаҡлашып китмәйсә булмай: тиҙҙән яҡында ғына ун ике ҡатлы йорттоң беренсе ҡатында филиалыбыҙ асыласаҡ, унда ла ике төркөмгә башҡорт балаларын йыябыҙ", - тип һөйләне Алһыу Фәнил ҡыҙы.**

**249-сы башҡорт балалар баҡсаһы менән танышыуын танышҡас, уның эсендәге иң ҡиммәтлеһе - кескәй тәрбиәләнеүселәр икәнен иҫтә тотоп, улар менән дә һөйләшеп алдыҡ. Бала саҡ хыялдары кешене бөтә ғүмере дауамында оҙата бара, тиҙәр. Кешенең үҫкәс ниндәй булыры ғына түгел, хатта милләттең киләсәге лә тап шул бала саҡ хыялдарына бәйле. Ә бөгөн беҙҙең балалар нимә тураһында хыяллана, киләсәктә кем булырға теләй, ниндәй алмаш үҫеп килә? Был һорауҙарға яуапты Нариман Мағашев, Гөлфинә һәм Эмиль Иҫәндәүләтовтар, Тимерхан Кейекбирҙин менән бергәләп эҙләнек.**

# ТУҒАН ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШКӘН -

## бәхетенә нигеҙ ҡорған

**➔ Үҫкәс, кем булырға теләйһең?**

**Нариман:** Мин полицейский булам, бандиттарҙы тотком килә.

**Эмиль:** Футболсы буласаҡмын, уларҙың аҡсаһы күп була.

**Гөлфинә:** Үҫкәс, врач булам да, әсәйемде дауалайым.

**Тимерхан:** Ә мин машина йөрөтәм.

**Эмиль:** Ә нимәшләп самолет, йә берәй вертолет йөрөтмәйһең?

**Тимерхан:** Машина йөрөткөм килә, водитель булам мин.

**Нариман:** Ә кем ҡурайсы була инде? Береһе лә булмаһа, мин атайым кеүек ҡурайсы булам!

**➔ Яраткан геройҙарығыҙ барҙыр, моғайын. Һеҙ уларға оҡшарға теләр инегеҙме?**

**Эмиль:** Минең геройым икәү. Береһе Халк - ул ҙууу-ур, йәп-йәшел кеше, шундай көслө. Икенсеһе - Леонардо тигән черепашка-ниндзя. Ул кешеләрҙе ҡотҡара, Шредер тигән яуызға ҡаршы ҡылыс менән һуғыша.

**Гөлфинә:** Минең Принцесса булғым килә, король һарайында ғына йөрөй ул.

**Нариман:** Человек-Паукты яратам, ул кешеләрҙе ҡотҡара, тик яҡшылыҡтар ғына эшләй.

**➔ Ә башҡорт батырҙарын беләһегеҙме?**

**Нариман:** Кешеләрҙе аждаһанан ҡотҡарған Урал батырҙы беләм.

**Тимерхан:** Тәрбиәсе апай беҙгә йоҡлар алдынан башҡортса әкиәттәрҙе күп уҡый ул былай.

**Гөлфинә:** Ә минә әсәйем башҡортса мультик күрһәтә. Өләсәйемә барһаҡ, ул әкиәттәр һөйләй, унда ла батырҙар күп. Исемдәрен генә оноттом...

**➔ Һеҙгә аттар оҡшаймы?**

**Гөлфинә:** Эйе, минең уйынсыҡ атым бар.

**Нариман:** Ә минә Салауат Юлаевтың аты оҡшай.

**Эмиль:** Уның аты минә лә оҡшай, Салауат Юлаев - ул башҡорт халыҡ батыры бит.

**Тимерхан:** Мин уның эргәһенә барғаным бар, мин дә беләм Салауат Юлаевты. Унда боҙҙан эшләнгән матур ҡалаһы ҡараным, тауҙан шыуҙым.

**➔ Тышта уйнарға яратаһығыҙ инде улай булғас?**



**Тимерхан:** Эйе, мин ағайым, ҡустым менән тышҡа уйнарға сығам.

**Нариман:** Мин күберәк өйҙә уйнайым, телевизор ҡарайым. Әйһеһен Таштуғайға ҡартатайыма барам, унда еләк ашайым, алма ашайым. Өфөгә ҡарағанда ауыл минә ныҡ ыраҡ оҡшай.

**Гөлфинә:** Беҙ быйыл тышта Ҡарбабай эшләнек. Тик ҡышҡыһын ныҡ һыуыҡ, шуға мин мультиктар ҡарап ҡына өйҙә ултырғым килә.

**Эмиль:** Мин өләсәйемдәргә ҡайтҡанда урамда уйнарға яратам. Сибайҙа минең дуҫтарым күп,"Сулпылар" балалар баҡсаһына йөрөйҙәр.

**Тимерхан:** Минең дә дуҫтарым бар ул. Тик минең менән уйнаған малайҙарҙы ғына, дуҫтарым, тип әйтәм, шуға Байрас менән Артур - улар ысын дуҫтар.

**Нариман:** Минең Нәркәс исемле дуҫым бар, ул мине ярата. Бында балалар баҡсаһына йөрөмәй, мин уның өйөнә уйнарға барам.

**➔ Телевизорҙан һуғышҡан, атышҡан кешеләр тураһында кинолар ҡарайһығыҙмы?**

**Эмиль:** Теге атайҙар киноһынмы? Мин ҡарайым инде ул, как всегда.

**Тимерхан:** Мин Джеки Чан тураһында ҡарарға яратам, ул шундай шәп итеп һуғыша.

**Эмиль:** Минә Халк оҡшағайны ныҡ. Джеки Чан да оҡшай.

**➔ Дуҫтарығыҙ менән ниндәй телдә һөйләшәһегеҙ?**

**Нариман:** Мин Руслан ағайым менән русса һөйләшәм. Башҡалар менән башҡортса ғына һөйләшәм.

**Эмиль:** Руслан менән Ғәзиз башҡортса ла белә, русса ла белә. Шуға беҙ берберебеҙ менән русса һөйләшәбеҙ ҙә ҡуябыҙ.

**Тимерхан:** Минең балалар баҡсаһына йөрөгөм килмәй, шуға береһе менән дә һөйләшмәйем.

**Гөлфинә**: Балалар баҡсаһына минең йөрөгөм килә, иртәнсәк йоҡонан тороуы ла ауыр түгел. Минә бында уйынсыҡтар оҡшай, тәрбиәсе апайҙарҙы һәм әсәйемде тыңлап ҡына йөрөйөм. Мин тыңлағас, әсәйем ҙур, матур күбәләк алып бирҙе.

**Нариман:** Мин дә бөтәһен дә тыңлап ҡына йөрөйөм. Тик ҡайһы берҙә өйҙә, тыңлашмай, компьютерҙа оҙаҡ уйнаһам, ҡайыш эләгә.

**Эмиль:** Мине лә мөйөшкә ҡуйғандары бар.

**➔ Ярамаған, насар эш эшләгәнегеҙ бармы?**

**Эмиль:** Юҡ, ата-әсәйем әйткәнде мин аңлайым. Шуға шырпы менән дә уйнамайым, газда кәстрүлдә бешеп ултырған ашҡа ла теймәйем.

**Нариман:** Розеткаға тейергә, уның тишегенә бер нәмә лә тығырға ярамай. Шунан компьютерҙа күп уйнарға ярамай, күҙҙәр күрмәй башлай.

**Гөлфинә:** Тышта оҙаҡ торһаң, Ҡыш бабайға әйләнәһең.

**Эмиль:** Тәҙрә төбөнә менергә ярамай, атыу самолет ҡолап төшөргә мөмкин.

**Гөлфинә:** Әсәйем минә юбка, кофталар бәйләй матур итеп. Тик минә әле, өйрәнгем килһә лә, энәгә тейергә ярамай, сәнселеп ҡуйыуың бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Балалы өй - хәйләһеҙ өй", тип юҡҡа ғына әйтелмәйҙер. Бала үҙе ишеткән, күргән һәр нәмәгә ихлас ышана, серҙәрен дә һораған һәр кешенең күҙенә ҡарап сисеп бирә ала. Ололарҙың һәр ҡылығын да "шулай булырға тейеш икән" тип ҡабул итә, атаһы йә әсәһе кеүек эшләһә, һөйләһә, үҙен үҫеп еткән, үҙаллы тип һанай. Йәш быуын, киләсәгебеҙ тураһында һөйләгәндә нәҡ шул балаларҙың пластилин кеүек еңел генә үҙгәреп тороуын иҫтән сығармаһаҡ ине. Сөнки уларҙың рухи донъяһын, ниндәй һөнәр һайлауын, тәрбиә-тәртибен, ниндәй хыял менән янып йәшәрен ата-әсәләр, иң яҡын кешеләре билдәләй. Ә инде балалар баҡсаһында ошо башлап һалынған нигеҙҙе ныҡыталар, үҫтерәләр генә. Был йәһәттән, Өфө ҡалаһы Совет районы 249-сы балалар баҡсаһына йөрөүсе кескәйҙәребеҙ бәхетле, тиһәк тә яңылышмабыҙ. Баш ҡалабыҙҙың, республиканың бөтөн ҙур ҡала, ауылдарындағы башҡорт балалар баҡсаларында ла ошондай мөхит тыуҙырылһа, рухи тәрбиәгә әһәмиәт бирелһә, туған телгә иғтибар етерлек булһа, киләсәктә балаларыбыҙҙың ғына түгел, үҙебеҙҙең дә хыялдар тормошҡа ашыр, иншаллаһ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Башҡорттар араһында шағир һәм композитор һәләтен берләштергән сәсәндәр йыш осрай. Поэтик ижадтың ни тиклем интенсив булыуын уларҙың һәр быуыны һайын яңы йырҙар барлыҡҡа килеүенән генә лә күрергә мөмкин.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн




### Гәрәй улысы, ихтилалдар, Мутиндар династияһы

XVI быуатта башҡорттар үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылғандан һуң, рәсми документтарҙа Гәрәй улысы телгә алына башлай. Ул һуңынан Ил Гәрәй һәм Урман Гәрәй тип аталған ике өлөшкә бүленә. Ошо ырыуҙың Гәрәй-Ҡыпсаҡ аймағына ҡараған вәкилдәре, гәрәйҙәрҙең төп массаһынан айырым, Ҡыпсаҡ улысында көн күрә. Әгәр Ил-Гәрәй Ағиҙел йылғаһының аҫҡы ағымында урынлашһа, Гәрәй-Ҡыпсаҡ аймағы Алатау һәм Ҡалыу тауҙары һыртында була (Ишембай районында урынлашҡан тауҙар).

Гәрәйҙәр XVII-XVIII быуаттарҙа ҡупҡан башҡорт ихтилалдары үҙәгендә тороп ҡала. Уларҙың аҫаба ерҙәренә батша гарнизондары яҡын урынлашыуға ҡарамаҫтан, гәрәйҙәр һәр ихтилалда әүҙем ҡатнашлыҡ күрһәтә. XVII быуатта болаларҙы баҫтырыу, халыкты тынысландырыу маҡсатында батша хөкүмәте ашығыс рәүештә аманатлыҡ институты булдыра. Уға ярашлы, һәр башҡорт улысынан бер йәки бер нисә зыялы кеше яҡындағы рус ҡәлғәһенә аманат итеп бирелә. Мәҫәлән, 1662-1664 йылдарҙағы ихтилалдар барышында бик күп старшиналар һәм тархандар ҡулға алына. XVIII быуаттың 40-сы йылдарында аманатлыҡ институты бөтөрөлә, ләкин әлеге практика Пугачев яуы ваҡытында яңынан ҡабатлана. Ҡазан даруғаһынан 11 старшина батша ғәскәрҙәре тарафынан ҡулға алына. Улар араһында Гәрәй улысынан Аҙнағол Мутин да була.

Был ырыуға ҡараған кешеләр араһында Мутиндар династияһы айырым урын алып тора. Ошо заттан бик күп йәмәғәт һәм хәрби эшмәкәрҙәр сыға. Был династия Мута Йәнырыҫов исемле кеше менән бәйле. Уның исеме 1743 йылдағы бер документта телгә алына. Мута Йәнырыҫов Гәрәй улысы старшинаһы була, Таҡталысыҡ ауылына нигеҙ һала (был ауыл әлеге мәлдә Татарстан республикаһының Аҡтаныш районына ҡарай). Уның улы Тимер Мутин хәрби һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ билдәлелек ала. Ул 1756-1763 йылдарҙағы ете йыллыҡ һуғышта ҡатнаша. Ҡыҙрас Муллаҡаев етәкләгән башҡорт полкында командир ярҙамсыһы була. Пруссияға поход ваҡытында казактар, башҡорттар, ҡалмыҡтар, мишәрҙәр көн һайын тиерлек дошман кавалерияһы менән бәрелештәргә инә. Ә 1727 йылдың 19 августында Гросс-Егерсдроф буйында хәл иткес алыш була. Был алышта Пруссия короле Фридрих II ғәскәрҙәре менән тар-мар ителә. Ошо яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙрас Муллаҡаев менән Тимер Мутин иҫтәлекле ҡылыс һатып алыу өсөн 50 һум менән бүләкләнә.

Рәсәй тәхетенә һәр яңы батша ултырған һайын башҡорттар, Санкт-Петербургҡа барып, Сенат алдында үҙҙәренең тоғролоғон иҫбатлап, анттарын яңыртып тороп булғандар. Әйтергә кәрәк, был факт башҡорт халҡының Рус дәүләтенә ҡараған башҡа милләттәргә ҡарағанда өҫтөнөрәк хоҡуҡтарға эйә булыуын күрһәтеп тора. Батша (батшабикә) менән булған осрашыуҙарҙы башҡорттар үҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе уларға туранан-тура һөйләп, хәл итеү әмәлдәрен эҙләү өсөн дә ҡулланғандар. 1759 йылда тәхеткә Елизавета Петровна ултырғас, башҡорт делегацияһы Петербургҡа юл тота. Был делегация составында Тимер Мутин да була. Ул бар башҡорт халҡы исеменән телмәр тота. Унда башҡорттарҙың жалованиелар аша нығытылған аҫаба ерҙәрен талау, тартып алыу осраҡтары булыуын әйтеп үтә һәм ошо мәсьәләне хәл итеүҙе һорай. Шулай уҡ мөрәжәғәттә рәсми документтарҙы, фармандарҙы киң халыҡ массаларына аңлашылһын өсөн төрки теленә тәржемә итеү үтенесе лә була. Уларҙың челобитныйы ҡабул ителә, Сенат Ырымбур губернаһы канцелярияһына указ ебәрә. Унда "... впредь оному башкирскому народу никому никаких обид и разорений не чинить и в угодьях их насильством не селиться" тип яҙылған була.

Пугачев тарафынан башланып киткән Крәстиәндәр һуғышына башҡорттар ҙа әүҙем рәүештә ҡушыла. Гәрәйле Аҙнағол Тимеров Елабуға ҡалаһын ҡамауҙа ҡатнаша. Әммә был ихтилалда гәрәй ырыуынан Йомаҡай Аҫҡаров исемле икенсе старшина нығыраҡ билдәлелек ала. 1773 йылда Өфө провинцияһы канцелярияһында Пугачевты ҡулға алыу маҡсатында 700 башҡортто мобилизациялау буйынса указ сыға. Был ғәскәри берәмеккә Шүлгән ауылынан Йомаҡай Аҫҡаров етәксе итеп ҡуйыла. Әммә Крәстиәндәр һуғышына хас булғанса, башҡорттарҙан торған каратель отряды боласыларҙы тотоу урынына, үҙҙәре улар яғына сыға. Шул уҡ йылдың ноябрь айында Йомаҡай Аҫҡаров менән Әбдәй Ғабдулов Уса юлында баш күтәреүселәрҙең власын урынлаштыра.

Башҡорттар Пугачев киткәс тә ҡоралдарын һалмай. 1774 йылдың июлендә Аладдин Биҡтуғанов, Йомаҡай Аҫҡаров, Адигут Темәсов, Рахманғол Иртуғанов, Ғабдулсәләм Рамзин етәкләгән төркөмдәр Әңгәсәк заводын һаҡлаған хөкүмәт ғәскәрҙәре менән яуға инә. Ошо уҡ кешеләр батша хөкүмәтенә тоғролоҡто һаҡлап ҡалған башҡорт старшиналары Шәриф Кейеков менән Ҡолой Балтасовҡа хат яҙалар. Хаттарында улар башҡорттар араһында килеп сыҡҡан аңлашылмаусанлыҡтарҙы хәл итеү юлдарын эҙләү өсөн осрашырға тәҡдим итәләр.

Крәстиән һуғышы тамамланып, 1773-1775 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы баҫтырылғандан һуң, хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡан ҡайһы бер старшиналар ярлыҡана. Аҙнағол Тимеров күпмелер ваҡыт Ҡазанда аманат булып тотҡонлоҡта ултырғандан һуң иреккә сығарыла. Ул Гәрәй улысының старшинаһы булып хеҙмәт итеүен дауам итә, 1798 йылда Башҡорт-мишәр ғәскәре ойошторолғандан һуң, 11-се башҡорт кантонының йорт старшинаһы итеп тәғәйенләнә.

Мутиндар 1917-1920-се йылдарҙағы Башҡорт милли хәрәкәтендә лә тәүге көндәрҙән алып әүҙем ҡатнаша. Башҡорт милли хәрәкәте Февраль революцияһынан һуң барлыҡҡа килә. Хәрәкәт Рәсәйҙең федерализмы һәм Башҡортостан республикаһы автономияһы өсөн сығыш яһай. I Бөтә Рәсәй мосолмандар съездынан һуң, Ырымбурҙа Башҡорт өлкә бюроһы төҙөлә, был орган составына Ғариф Мутин инә. Илдархан Мутин иһә Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын арҡаҙаштарының береһе була. 1917 йылдың 20 июлендә Ырымбурҙа I Бөтә башҡорт ҡоролтайы үтә, шура составына Ғариф һәм Илдархан Мутиндар ҙа һайлана. Илдархан Мутин Башҡортостан республикаһы төҙөлөүгә тос өлөш индергән шәхестәрҙең береһе, автономия аяҡҡа баҫҡан осорҙа юғары вазифалар биләй. Большевиктарҙың Башҡортостанға сәйәси-иҡтисади автономия урынына, милли-мәҙәни автономия ғына ҡалдырасаҡтары билдәле булғас, ул Зәки Вәлидиҙең башҡа арҡаҙаштары менән бергә Урта Азияла көрәшен дауам итә. Һуңынан Башҡортостанға ҡайта. 1938 йылда репрессияланa һәм үлем язаһына хөкөм ителә.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Сәнғәт һәм фольклор

Йола йырҙары араһында бигерәк тә сеңләү айырылып тора. Ҡыҙ өсөн ҡалым алырға була, ата-әсә бик йыш ҡыҙҙарын бер нисә ҡатыны булған бай ҡартҡа биргән. Был осраҡта йәш кәләш үҙенең яҙмышын йыр аша белдергән. Уларҙа көслөп кейәүгә биреү һөҙөмтәһендә буласаҡ иренә күрә алмаусылыҡ сағылған.

Башҡорттарҙың боронғо ауыҙ-тел ижады төрҙәренең береһе - ҡобайыр. Йырҙан айырмалы, унда строфалар бик күп булыуы мөмкин. Был уның эпик сюжетына бәйле. Ҡобайырҙа тыуған яҡ тәбиғәтенең матурлығына дан йырлана, батырҙар данлана, Алтын Урҙа һәм нуғай хандарына ҡаршы азатлыҡ көрәшенә күтәрелергә саҡырыу яңғырай.

XX быуат башында бөтөн ерҙә лә тиерлек батырҙарҙы, ихтилал етәкселәрен һәм юлбашсыларын оноҡтандар тиерлек. Бары тик уларҙың һуңғыһы, Салауат Юлаевты ғына хәтерҙәрендә ныҡлы һаҡлап, уға бағышланған ҡобайырҙарҙы башҡарғандар. Салауаттың азатлыҡ көрәшенә йәне-тәне менән тоғро булыуы, уның ҡаһарманлығы һәм батырлығы был образды әкиәт батырҙары кимәленә күтәрә. Салауат эпик батыр һыҙаттары менән байытыла һәм шул рәүешле ул көсө һәм ҡаһарманлығы менән мифик геройҙар менән тиңләштерелә. Сәсән Салауаттың батырлығы тураһында бәйән итқәндә, уның лирик хистәрен һәм кисерештәрен еткереү өсөн, "бында Салауат йырлап ебәргән", тип, үҙе ул булып йырлаған.

Башҡорттар араһында шағир һәм композитор һәләтен берләштергән сәсәндәр йыш осрай; улар үҙҙәренең көйөнә һүҙ яҙып, яңы йырҙар ижад итә. Башҡорттарҙа поэтик ижадтың ни тиклем интенсив булыуын уларҙың һәр быуыны һайын яңы йырҙар барлыҡҡа килеүенән генә лә күрергә мөмкин, шуға ҡарамаҫтан, иң яҡшы лирик йырҙар һәм ҡобайырҙар быуындан-быуынға тапшырылған.

Көйҙәренә ҡарап, башҡорт йырҙары ике төркөмгә бүленә: оҙон көй йәки оҙон йыр, ҡыҫҡа көй йәки ҡыҫҡа йыр. Һуңғыларына таҡмаҡ та инә.

Оҙон көйҙең үҫешендә йыйындар ҙур роль уйнай. Был жанр башҡорттарҙың музыкаль-поэтик ижадында лайыҡлы урын алып тора. Башҡа бер генә жанр ҙа халыҡтың асылын, уның художестволы образын оҙон көй кеүек асып бирә алмай. Оҙон көйҙө йырсы үҙе генә, ҡурайсы яңғыҙы йәки йырсы менән ҡурайсы дуэты башҡара.

Ҡыҫҡа көй ҡыҫҡа көйгә һәм бейеү көйөнә бүленә. XIX быуаттың яртыһында бейеү көйө дүрт юллыҡ шиғыр, күп осраҡта мөхәббәт шиғыры менән берләшә башлай. Был шиғырҙар таҡмаҡ атамаһы ала.

Йырсылар араһында юғары - тенор тауыш өҫтөнлөк итә. Улар һис ауырлыҡһыҙ иң юғары ноталарҙы алырға һәләтле, һәм тауыш тембры буйынса балалар тауышына (альт) бик яҡын. Барлыҡ йырҙарҙы башҡарыу үҙенсәлеге булып йырҙың, бигерәк тә оҙон көйҙең, һуңғы нотаһын тауышты тирбәлдереп һуҙыу тора.

Һунарсыларҙың төрлө ҡош һәм кейек тауышын ҡабатлауы үҙенсәлекле сәнғәтте тыуҙыра. Һуңынан был тауыштар көйгә әүерелә. Йырсылар араһында ла шундай тауыштарҙы ҡабатлаусылар осрай.

***✓ Уҡып сығып, театрҙа эшләй башлағас, әсәй минең төп тәнҡитсемә әйләнде. Театрҙа эшләй башлауыма биш йыл үткәс кенә, "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар" спектаклен ҡарағас: "Бына хәҙер ысын артист булырыңа ышандым", - тине.***

**Мәҙәниәт йылы аҙағында Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Олег Ханов Константин Станиславский исемендәге премияға лайыҡ булғайны. Режиссер, педагог һәм ҙур коллективтың етәксеһе булған Олег Закир улы барыбер ҙә күптәрҙең яратҡан актеры булып ҡалалыр ул. Милли театрҙың роле заман менән бергә үҙгәрәме? Бөгөнгө театрҙың ниндәй көнүҙәк проблемалары бар? Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Рәсәй Федерацияһының Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге дәүләт премияһы лауреаты Олег Закир улы Ханов менән ошолар һәм, актер булараҡ, уның үҙенең ижады хаҡында әңгәмәләштек.**

## Баһаның ҙуры-бәләкәйе булмай

Актер булып эшләгән осорҙа ролдәр өсөн бирелгән наградалар байтаҡ булды. Ваҡытында улар ҙа күңелдә ниндәйҙер эҙ ҡалдырғандыр инде. Тик кеше бер көн менән генә йәшәмәй. Ҡыуаныслы ваҡиғалар ҙа, яҡшыһы ла, яманы ла онотола, сөнки киләсәккә үткәндәрҙе һөйрәп йөрөүҙең әһәмиәтен күрмәйем мин. Шулай ҙа үткән йылдарға әйләнеп ҡарағанда, иң тәүҙә Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы буйынса ҡуйылған "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар" спектакле хәтергә төшә. Бер нисә миҙгел буйына бик уңышлы барҙы ул. 1978 йылдың ноябрендә сәхнәгә сығарҙыҡ, ә 1980 йылда уны СССР-ҙың Дәүләт премияһына тәҡдим иттеләр. Суфия Ғилман ҡыҙы Кусимова "Правда" гәзитенә ҙур итеп мәҡәлә яҙҙы. Ул заманда "Правда" гәзитендә баҫылыу - был премияға үтеү, тигән һүҙ ине, шуға беҙ еңеребеҙгә ныҡлы ышаныс менән йөрөгәйнек. Тауыш биреү мәле етте һәм, улар йәш әле, уларҙың барыһы ла алда, тип, беҙҙе премияға үткәрмәнеләр. Баһалама ағзаларының, барыһы ла алда әле, тигәне раҫҡа сыҡты, сөнки 1996 йылда әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге РФ Дәүләт премияһына "Бибинур, аһ, Бибинур!" спектакле менән лайыҡ булдыҡ. Был премияны мин, Флорид Бүләков, Рифҡәт Исрафилов, Таң Еникеев Борис Ельциндың ҡулынан Кремлдең Георгий залында алдыҡ. Бик матур ваҡиға булғайны ул. СССР-ҙың халыҡ артистары Михаил Ульянов, Элина Быстрицкая, Михаил Глузский, Алиса Фрейндлих менән аралашыу үҙе бер бәхет булды. "Сатирикон" театры етәксеһе Константин Райкин менән дә шунда танышҡайныҡ. Аҙаҡтан беҙҙе яҙмыш уның менән тағы ла осраштырҙы - "Сатирикон"да өс йыл эшләргә тура килде миңә.

Ә 1980 йылда "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар" спектаклендәге ролдәребеҙ өсөн миңә, шулай уҡ Таңсулпан Бабичеваға, Нурия Ирсаеваға, Фидан Ғафаровҡа Салауат Юлаев премияһы тапшырылды. Республиканың иң юғары дәүләт наградаһы булараҡ, ул миңә ҙур яуаплылыҡ өҫтәне, үҙемә ҡарата талапсанлыҡ та артты. Ул бүләктең миҙалын мин айырыуса ғорурлыҡ менән тағып йөрөнөм.

Яңыраҡ ҡына лайыҡ булған Станиславский исемендәге премия ла миңә ҡәҙерле, сөнки ул халыҡ-ара кимәлдәге театраль премия, унда һине театр эшмәкәрҙәре, театр әһелдәре, халыҡ-ара Станиславский исемендәге фонд ойошмаһы баһалай. Баһалама рәйесе, режиссер Сергей Женовач, баһалама ағзалары - Рәсәйҙең халыҡ артистары Людмила Максакова, Валерий Баринов, СССР-ҙың халыҡ артисы Олег Табаков, күренекле сәнғәт белгестәре Алексей Бартошевич, Инна Соловьева һәм башҡалар менән күрешеп, аралашыу, Елизавета Боярская, Данила Козловскийҙар менән бергә премия алыу минең өсөн ҙур дәрәжә. "Һуңғы йылдарҙағы ролдәре өсөн" тип билдәләнеләр уны. Иң ҡиммәтлеһе - мәскәүҙәрҙең минең ижадымды күреп, юғары баһа биреүе. Башҡорт театры К. Станиславский системалаған рус театр мәктәбенә нигеҙләнгән, шуға ла был шәхестең исемендәге премия алыу оло мәртәбә. Тантанала башҡорт телендә коллективыма, ғаиләмә рәхмәт белдерҙем һәм шул саҡта Данила Козловский һикереп торҙо ла: "Һеҙ башҡортса әйттегеҙ, әммә мин һеҙҙе аңланым!" - тине. Мин махсус рәүештә башҡортса һөйләнем, сөнки Бартошевич әйтеүенсә, был премия беренсе тапҡыр Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларынан Рәсәй төбәктәренә сыҡҡан. "Баш ҡаланан ситтә лә бынамын тигән театрҙар бар", - тип һоҡланыуын да белдерҙе Алексей Вадимович. Был уларҙың башҡорт театры сәнғәтен таныуы, тип аңларға кәрәк.

## Халыҡ актеры ниндәй була?

Актер булараҡ, тамашасыларым тарафынан йыш ҡына "Һеҙ - халыҡсан актер", тигән һүҙҙе ишетеү, моғайын да, бөтөн наградаларҙан да өҫтөнөрәктер. Сәхнәлә һәр ваҡыт йөрәгем ҡушҡанса уйнайым. Халыҡсанлыҡҡа килгәндә, күңел ҡушҡанса уйнауҙың нигеҙе - атайымдан, БАССР-ҙың халыҡ артисы Закирйән Хановтан һәм әсәйемдән, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Шәмсинур Сиражетдиновананан киләлер. Саҡ ҡына ла фәстермәйем дә, арттырмайым да - был ысынлап та шулай.

Бала саҡта әсәйем миңә үҙе театр студияһында уҡыған саҡта ҡараған спектаклдәре тураһында һөйләй торғайны. Бигерәк тә Шекспирҙың "Отелло"һы хәтерҙә уйылып ҡалған. Сюжет менән бергә артистарҙың нисек уйнауын, хатта уларҙың сәхнәнең ҡайһы урынында тороуын оҫта итеп һүрәтләр ине. Һәр хәлдә, мин 5-6-сы класта уҡ Отеллоға һоҡлана инем. "Театральная жизнь" журналында "Отелло" тигән берәй һүҙ күреп ҡалһам, шунда уҡ ҡыҙыҡһынып уҡырға тотонор инем. Спектакль генә түгел, кино булһынмы, башҡа йүнәлешме - әсәй сәнғәтте бик нескә тоя һәм аңлай ине. "Советский экран" журналын алдыра инеләр, бер тапҡыр шунда баҫылған "Тихий Дон" фильмының фотоларын күрһәтеп, миңә романдың айырым сәхнәләрен һөйләне һәм уның төп линияһын күрһәтте. "Бына, - ти, - Григорий башта бесән сапҡанда салғы менән бүҙәнәнең аяғын имгәтә. Ул саҡта - бүҙәнәне, һуғышҡа алынғас, үҙе тәүгә үлтергән Австрия һалдатын йәлләй. Аҙаҡтан һуғыш уны ҡанһыҙға әйләндерә һәм ул революция ваҡытында биш матросты бер юлы ҡылысы менән тураҡлай". Йәки: "Пантелей Прокоповичтың образы шул тиклем халыҡсан, килене менән һөйләшкәндә арҡаһын ишек яңағына ышҡып тырнап тороуын ҡара әле һин уның", - тип, тәү ҡарашҡа күҙгә лә салынмаған деталдәргә иғтибарымды йүнәлтә торғайны. Гоголь, Пушкин, Горький, Маяковский һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре менән тәүҙә ул таныштырҙы. Чеховты бөтөнләй аңламай инем, ә ул көлә-көлә "Хамелеон"ды һөйләй. Бына уның тәрбиәһе шулай булды. Тап ошолар минән актер яһағандыр ҙа, кем белә...

Сибай театры, ул быуын артистары, ғөмүмән, бик тәбиғи инеләр. Улар сәхнәлә, бәлки, ниндәйҙер юғары театраль ысулдар ҙа ҡулланмағандыр. Ләкин уларҙың уйнауында тәбиғилек, ихласлыҡ, эскерһеҙлек гел булды.

# ТЕАТР ТАМАШАСЫ

## тимәк, халыҡтың аңы,



***Бөгөн беҙгә милли мәҙәниәтте, әҙәбиәтте донъя кимәленә сығарыу тураһында уйланырға ваҡыт. Европа, Көнсығыш илдәре менән йышыраҡ аралашҡан һайын, телебеҙҙе лә башҡа халыҡтарға ишеттерәсәкбеҙ, улар ҙа башҡорт теле менән ҡыҙыҡһына башлаясаҡ. Үҙ илеңдә "Мин башҡорт", тип йөрөүҙән файҙа юҡ, сөнки барыһы ла белә һинең башҡорт икәнеңде. Ә Германия йәки Ҡытай сәхнәһенә сығып, "Мин башҡорт", тип әйтеү, милли мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың асылын, рухын күрһәтеү - бөтөнләй икенсе нәмә. Беҙҙең халҡыбыҙ бер кемдән дә кәм түгел, уның да донъяға, философик төшөнсәләргә, тормоштоң мәғәнәһенә ҡарата үҙенең ҡарашы, алдынғы, зауыҡлы кешеләре бар.***

Бер интервьюла әйткәйнем дә әле, мин шул тиклем һөмһөҙ булғанмын, үҙемсә, атайымдан күберәк беләм, яҡшыраҡ уйнайым, тип уйлай инем. Хатта уйлайым ғына түгел, быға ышана инем. Бер тапҡыр Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡығанда Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы Ҡасимова дәрес алып бара. Юлы төшөп, атайым Өфөгә килгән дә, мине күрергә, тип, институтҡа ингән. Дәрес ваҡытында коридорҙа көтөп йөрөгән дә, ишектән башын тығып ҡарамаҡсы булған, йәнәһе, былар нимә эшләй икән? Уны күреп, Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы: "Закирйән Ханович, әйҙәгеҙ, үтегеҙ", - тигән була. Атайым бер нисә этюд ҡараны, Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы уның фекерҙәрен һорашты. Бер ваҡыт атайым: "Мин уйнап күрһәтәйемме?" - тине, миңә уңайһыҙ булып китте хатта. Ә атайым сыҡты ла, үҙен сәхнәләгеләй итеп тойоп, уйнап алып китте. Студенттар ултыра башты баҫып - беҙҙе бит Станиславский буйынса, тәҡдим ителгән талаптарҙы дөрөҫ, тормоштағы кеүек итеп уйнарға өйрәтәләр! "Атайым әҙерәк арттырып ебәрҙе, уның сәхнәгә килеп сығыуы нисектер тәбиғи булманы", - тип әйтеп ҡуйҙым ул уйнап күрһәткәс. Әле был ҡылығым өсөн үҙемә оят. Ул бит бик тәбиғи итеп уйнаған. Мин белер-белмәҫ көйөнә уны тәнҡитләп маташҡанмын. Был, әлбиттә, ахмаҡлыҡ та түгел, ә тормошто, буласаҡ һөнәремдең бар нескәлектәрен аңлап өлгөрмәгәнлек. Сәхнәлә, бигерәк тә беҙҙең милли театрҙа, ошондай эскерһеҙлек, ябайлыҡ, мәрхәмәтлек өҫтөнлөк итергә тейешлеген хәҙер мин, әлбиттә, бар тулылығында аңлайым.

Уҡып сығып, театрҙа эшләй башлағас, әсәй минең төп тәнҡитсемә әйләнде. Һәр бер премьерама килә торғайны. Театрҙа эшләй башлауыма биш йыл үткәс кенә, "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар" спектаклен ҡарағас: "Бына хәҙер ысын артист булырыңа ышандым", - тине. Бөгөн мине тамашасы халыҡсан актер, тип таный икән, уны миндә атайым менән әсәйем тәрбиәләгән, һәм мин уларҙың улы булыуым менән ғорурланам.

## Тормош тәжрибәһе лә мөһим

Ситтә эшләп килгәндән һуң, бөтөн нәмәгә - кешеләргә, ваҡиғаларға, йәмғиәткә, эшебеҙгә, коллективҡа ҡарашым тулыһынса тиерлек үҙгәрҙе. Быға тупланған тәжрибә лә, олоғая килә күңелдең олпатланыуы ла йоғонто яһайҙыр, һәр хәлдә, мин үҙемдең эске торошомда ла үҙгәреш тоям.

Бер ваҡыт шулай Дүртөйлө яғында гастролдә йөрөйбөҙ, бер үк ваҡытта районда медицина хеҙмәткәрҙәренең конференцияһы үтә ине. Мине, Фидан Ғафаровты, Нурия Ирсаеваны улар менән осрашыуға саҡырҙылар. Мин йәшмен, әммә күңелдә үҙ-үҙемә ышаныс тамырланып өлгөргән осор. Конференция мәлендә залдан бер ханым аяғүрә баҫты ла: "Бына, йәмәғәт, йәш кенә булһа ла, танылыу яулап өлгөргән Олег Ханов ултыра бында, ул Ҡыйғы районынан, минең яҡташым", - тине. Мин, уны-быны уйлап тормайынса: "Ғәфү үтенәм, әммә мин Ҡыйғынан түгел, ә Архангел районынан", - тип һүҙ ҡыҫтырҙым. Аҙаҡтан был ҡатын атайымды осратҡан да, ошо ваҡиға тураһында һөйләп киткән. Атай-әсәйем заманында Ҡыйғы театрында эшләгән, мин Ҡыйғыла тыуырға тейеш булғанмын, тик ундағы театр тарҡалғас, атай - Баймаҡҡа, әсәй, ауырлы булғас, үҙенең тыуған районына ҡайтҡан. Баяғы ҡатын шуға ла мине үҙенең райондашы итеп ҡабул иткәндер. Әммә мин уның ғорурланып әйткәненә ҡаршы сыҡтым булды бит инде. Салауат районы ла, Ҡыйғы ла, Архангел дә, Баймаҡ та, Сибай ҙа - минеке, тип кенә әйт тә ҡуй ҙа бит инде...

Йәки тағы бер миҫал. Ҡайнымдар Аҫҡын районында йәшәнеләр, йыл һайын уларға бесән сабырға ҡайта инек. Бер шулай ямғыр яуып китте лә, ҡайным менән урманға бәшмәк йыйырға киттек. Минең өҫтә - фу-

***Режиссураға ла уҡырға кәрәк, артистарҙы ла, тотош халҡыбыҙҙы ла уҡытырға кәрәк. Үкенескә күрә, һуңғы йылдарҙа кешелектең тотош быуыны, хатта бер-ике быуын юҡҡа сыҡты. Уларҙа белемгә ынтылыш юҡ.***



файка, башта - фуражка, аяҡта кирза итек. Ҡаршыға бер бәшмәксе килеп сыҡты ла, нимәлер һорап, миңә мөрәжәғәт итте. Ҡарап торҙо ла был: "Һин бит Шомбай, Олег Ханов!" - тине. Ә миңә уның алдында ошондай кейемдәр менән баҫып тороуы бик уңайһыҙ. "Юҡ, мин уға оҡшағанмын ғына..." тип, ситкә китә һалдым. "Эй, кейәү, кешене рәнйеттең дәһә, ул бит һине күреп, шул тиклем шатланды, ихласлығын белдерҙе. Аҙаҡтан, мин Ханов менән осраштым, тип һөйләүе уның өсөн ғорурлыҡ бит", - тине ҡайным һуңынан...

Быны мин-минлек тә тип атап булмай, әммә холҡомдоң ошондай яҡтары, тиҙ генә бушҡа күңел кителгән, ҡайһы саҡта уйлап еткермәгән саҡтар бар ине, хәҙер иһә тормош аҡыллыраҡ булырға өйрәтте. Башҡаларҙан ниндәйҙер мөнәсәбәт көтөргә лә кәрәкмәй, булғанын баһалаһаң һәм ҡәҙерләһәң, шул еткән. Ейәнем тыуғас, мин күп нәмәне хәҙер унан өйрәнәм. Балаларҙың бөтөн хәйләһе, теләге интонацияһытаптағы хәрефтәр яҡшыраҡ күренгән кеүек, ошо сит коллективтарҙа алған тәжрибә элек күрмәгән нәмәләрҙе асығыраҡ та, яҡтыраҡ та күрергә мәжбүр итә. Яҡшылабыраҡ ҡараһаң, беҙҙең театрҙағы ҡайһы бер нәмәләрҙе төҙәтергә генә түгел, тамырынан өҙөп ташларға һәм яңыса булдырырға кәрәк. Башҡорт театрының иң юғары үргә менгән сағында эшләгән актерҙар ҙа шул саҡтағы осҡондарҙы юғалтып бөтә яҙған. Әйтәйек, "Бибинур, аһ, Бибинур!" (Ф. Бүләков), "Мөгөҙлө шәп ир" (Ф. Кроммелинк), "Өлкән улым" (А. Вампилов), "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар", "Ҡыҙ урлау" (М. Кәрим) һәм башҡа спектаклдәрҙәге алымдар, бөгөнгө заман күҙлегенән шулай уҡ иҫкергән, тимәк, тамашасыға йоғонто яһауҙың башҡа алымдарын эҙләргә кәрәк. Шуныһы аяныслы, күп нәмә юғалған. Элек артистар үҙ ролен йөрәге аша үткәреп, тойғолары менән һуғарып, образдарын сәхнәгә тере итеп сығара ине. Бәлки, был ниндәйҙер кимәлдә шул тиклем раһында. Шулай, театрҙың үҙенең ыңғай яҡтары ла, проблемалары ла бар, беҙ улар тураһында беләбеҙ, ниндәйҙер саралар ҙа күрелә.

## Сәхнә теле дөрөҫ яңғыраһын

Булған проблемалар, кителгән ерҙәр ситтән ҡарағанда яҡшыраҡ күренә, тип әйткәйнем инде. Бында художество етәксеһе булып килгәс, беренсе спектаклдә үк башҡорт теленең нисек яңғырауын ишетеп, шаҡ ҡаттым. Баҫымдарҙы бөтөнләй дөрөҫ ҡуймайҙар, иҫкәрмә яһаһаң, беҙҙе шулай уҡыттылар, тиҙәр. Мин театрға башлап эшкә килгәндәге саф тел, Арыҫлан Мөбәрәков, Рим Сыртланов, Зәйтүнә Бикбулатова, Рәғиҙә Йәнбулатова, Ғәзим Туҡаев, Роза Кәримова, Әҡлимә Садиҡоваларҙың һөйләшкән теле бөгөн килеп дөрөҫ түгел икән! Был беҙҙең театрға ғына хас бәлә түгел, телевидение, радиола ла шулай уҡ хәл күҙәтелә. Шуға ла театрҙа тел таҙалығы ҡарашы, алдынғы, зауыҡлы кешеләре бар. Бары тик ошоларҙы үҙ кимәлендә генә түгел, ә дөйөм кешелек кимәлендә күтәрергә кәрәк, шул саҡта ғына беҙҙең телебеҙ ҙә лайыҡлы яңғыраясаҡ.

## Башҡалар беҙҙе танылһын өсөн...

Рәсәй, донъя кимәленә сығыу өсөн сит ил тамашасыһына ҡыҙыҡ булырҙай классик спектаклдәр ҡуйырға мөмкин ул, әммә иң мөһиме был түгел. Башҡорт театры башҡорт телендә һөйләшеүҙән тыш, донъяға үҙенең милләтенең рухын, асылын, күңелен асырға бурыслы. Бының өсөн милли драматургия юҡ, тип кенә әйтеү ҙә ниҙелер хәл итмәй. Был мәсьәләгә икенсе күҙлектән ҡарарға, булған авторҙарҙың әҫәрҙәрен сәхнәләштереү өсөн яңы театраль ысулдар эҙләргә кәрәк. Режиссер Айрат Абушахмановтың Мәжит Ғафуриҙың повесы буйынса ҡуйылған "Ҡара йөҙҙәр"ен генә алып ҡарайыҡ. Быны ул, исмаһам, яңы ракурс,

# ЙЫЯ АЛА ИКӘН...

## матурлыҡҡа ынтылышы уяна

нан, күҙенән күренеп тора, һин уны күрәһең, әммә күрмәмешкә һалышаһың. Шуның шикелле, кешенең күп хәрәкәттәре, әйткән һүҙҙәре аша уның нимә, нисек, күпме теләгәнен һиҙәһең, тик тура бәреп әйтеү урынына, үткәреп ебәрә беләһең. Унан һуң, бөтөн кешене лә бер юлы яратып, бөтәһен дә ыңғай тойғолар менән генә ҡабул итеп булмай. Толстой әйтмешләй, бер битеңә сапһалар, икенсе битеңде ҡуйыу ҙа ярамаған эш. Һәр нәмәлә сама булырға тейеш. Бөгөн бына ошоларҙы аңлауым менән дә айырылам мин теге замандағы Хановтан.

Мәрхәмәтле, рәхмәтле була белеүгә лә йылдар үткәс өйрәнәһең икән. Яҡындарымдың ҡәҙерен бөгөн тағы ла нығыраҡ беләм. Яҙмыш Башҡорт академия драма театрынан - Йәш тамашасылар театрына, унан Мәскәүгә, Мәскәүҙән - Ырымбурға, унан - Салауат театрына, унан, ниһайәт, кире Өфөгә ташланы. Ошо әйләнеп торған ҡуласала эргәмдә һәр ваҡыт ҡатыным Анфиса булды. "Мин актриса булам, бында ғына йәшәйем", - тип тә әйтә ала ине бит ул. Шунан нисек уға рәхмәтле булмайһың инде...

## Роль йөрәк аша үтергә тейеш

Башҡа театрҙарҙа эшләп алыуҙың ыңғай яҡтары булды, әлбиттә. Иң тәүҙә - тәжрибә туплайһың. Театрҙың, артистарҙың уйнауының, ғөмүмән, спектаклде ҡуйыуҙың башҡа төрлө ысулдары бар икәнен күреп беләһең. Унан һуң, миңә рус театрҙарында уйнарға, башҡа милләт кешеләре менән уртаҡ тел табырға өйрәнергә тура килде, был да оло тәжрибә.

Әммә быларҙың барыһының да тағы бер фәһемле яғын билдәләмәй булмай. Күҙлек кейһән, киябай ҙа булғандыр, тик улар халыҡты ышандыра ала ине бит. Ә хәҙерге йәш быуын күңел һәм йөрәк көсөн түгергә теләмәй, аҡыл, тел, ысулдар менән генә тамашасыны яуларға ынтыла. Сәхнәлә бөтөн ҡанундарҙы ҡулланып, ҡоро ғына итеп уйнап күрһәтеү аҙ.

Һәр тере организмдағы кеүек, театрҙа ла даими процесс бара. Унда төрлө характерлы кешеләр бергә уҡмашып, ҡайнап йәшәй. Һәм ул, һәр тере организмға хас рәүештә, мотлаҡ үҫешергә тейеш. Бөгөнгө тиҙлек, мәғлүмәт заманында осорҙан артта ҡалмау өсөн дә көс кәрәк. Яңыраҡ самолетта Мәскәүгә китеп барам. Эргәлә бер иптәш гәзит уҡый, ә артта ултырған 3-4 йәшлек ҡыҙыҡай оҫта итеп планшетта уйнап бара. Бына донъяны ҡабул итеүҙең ике ысулы. Беҙгә, өлкән быуынға ла был йәһәттән йәштәрҙән артта ҡалырға ярамай. Әммә күптәр ҡыбырларға теләмәй, ә үткән быуаттағы алымдар менән бөгөнгө тамашасыны яулап булмай. Йәштәр иһә, көстәрен, хистәрен түккеһе килмәй. Әлбиттә, мин бөтәһе тураһында ла әйтмәйем. Һуңғы спектаклдәрҙе генә алғанда, "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"ла - Руслан Хайсаровтың, "Ҡара йөҙҙәр"ҙә Гөлнара Ҡаҙаҡбаева, Римма Ҡаһарманованың эштәре миңә нығ оҡшай. "Ҡара йөҙҙәр"ҙә Әхәт Хөсәйенов нисек асылды! Йәштәрҙән Урал Әминев ысын сәхнә кешеһе, ул үҙен йәлләмәй эшләй. Тағы ла күптәр тураһында йылы һүҙҙәр әйтергә мөмкин. Театрға һуңғы йылдарҙа килгәндәрҙең араһынан әйткәндә, Лилиә Ғәлина фанатик артист. Ул артист булыр өсөн генә тыуған, сәхнәлә саҡта бер урында тороп сыҙамай бит ул, уның бөтөн булмышы уйнай. Илһам ене ҡағылған, тиҙәр ундайҙар ту-

өсөн көрәш башланды. Хөрмәтулла Ғаззали улы Үтәшев йәштәргә сәхнә телен өйрәтә. Йәштәр менән шиғыр һөйләү буйынса матур тамаша ла әҙерләп күрһәттеләр, шағирәләр менән берлектә тағы бер проект барлыҡҡа килде. Быйыл Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына бағышлап, һуғыш темаһына арналған шиғырҙар һөйләү буйынса тағы бер сара әҙерләнә. Сәхнә теленең таҙалығы - бер, актер дөрөҫ тын ала белергә лә, һүҙҙең мәғәнәһен аңларға өйрәнергә лә бурыслы. Ә әлеге проекттар йәштәргә ошо бурысты атҡарырға ярҙам итә.

Башҡорт телендә яҡшы итеп һөйләшергә уҡыу йортонда түгел, тап театрҙа өйрәнәһең инде ул. Хәтеремдә, эшкә килгәндә "р" хәрефен тейешенсә әйтеп еткерә алмай инем. Арыҫлан Мөбәрәковтан кәңәш һорағас, ул: "Ә һин ижекләп шиғыр уҡы", - тине. Ижекләп, йырлаңҡырап шиғыр юлдарын уҡығанда телдең моңон, ритмын тойоп алһаң, телмәр музыка кеүек яңғырай. Телдең моңон, гармонияһын татып ҡараған кешенең генә телмәре матур була. Иң аяныслыһы, телебеҙ ҡорой барған шишмә кеүек.

Бөгөн беҙгә милли мәҙәниәтте, әҙәбиәтте донъя кимәленә сығарыу тураһында уйланырға ваҡыт. Европа, Көнсығыш илдәре менән йышыраҡ аралашҡан һайын, телебеҙҙе лә башҡа халыҡтарға ишеттерәсәкбеҙ, улар ҙа башҡорт теле менән ҡыҙыҡһына башлаясаҡ. Үҙ илеңдә "Мин башҡорт", тип йөрөүҙән файҙа юҡ, сөнки барыһы ла белә һинең башҡорт икәнеңде. Ә Германия йәки Ҡытай сәхнәһенә сығып, "Мин башҡорт", тип әйтеү, милли мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың асылын, рухын күрһәтеү - бөтөнләй икенсе нәмә. Беҙҙең халҡыбыҙ бер кемдән дә кәм түгел, уның да донъяға, философик төшөнсәләргә, тормоштоң мәғәнәһенә ҡарата үҙенең яңыса ҡараш һәм был сәнғәт телендә бар халыҡтар менән дә һөйләшеп була. Рус кешеһе ҡараймы уны, немецмы, улар барыһын да аңлаясаҡ, сөнки был спектакль дин тураһында түгел, ә әҡлаҡһыҙлыҡтың, наҙанлыҡтың көсө, уның хатта трагедияға алып килеү ихтималлығы хаҡында. Ошондай кимәлгә күтәрелергә кәрәк бөгөн, икенсе акценттар, икенсе формалар, алымдар менән беҙҙең халҡыбыҙҙың ғына түгел, ә башҡа халыҡтарҙың да ауыртҡан урындарына баҫырға кәрәк.

Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тигән һүҙҙәрен йыш ҡабатлайым һуңғы арала. Режиссураға ла уҡырға кәрәк, артистарҙы ла, тотош халҡыбыҙҙы ла уҡытырға кәрәк. Үкенескә күрә, һуңғы йылдарҙа кешелектең тотош быуыны, хатта бер-ике быуын юҡҡа сыҡты. Уларҙа белемгә ынтылыш юҡ, мейеләре йә аҡса эшләү, йә һыра эсеү тураһында ғына уйлай. Йәмғиәттә әхлаҡһыҙлыҡ хөкөм һөрә. Милләтебеҙҙә насар ғәҙәттәргә эйә булыусылар һаны бер нисә генә булған хәлдә лә, алманы эстән сереткән бәләкәй генә бөжәк кеүек, улар ҙа халыҡты серетә. Мәғариф яңынан түләүлегә әйләнә бара. Үткәндә генә уҡып ултырҙым, баҡтиһәң, хәҙер Рәсәй сит илдән летчиктарҙы эшкә саҡыра икән, сөнки үҙебеҙҙә сәләмәт кешеләр юҡ. Спортҡа килгәндә, ни өсөн беҙҙең фигуристар еңеү яулай алмай, тип аптыраған булабыҙ. Сөнки иң һәләтле тренерҙарыбыҙҙы ситтәр үҙ яғына ауҙарып бөттө. Көнбайыш шул тиклем ҙур көс түкте беҙҙе бөлдөрөү өсөн. Бөгөн ысын мәғәнәһендә нервылар, аҡсалар, иҡтисадтар алышы бара. Туранан-тура үлтермәһәләр ҙә, ниндәйҙер милли ҡиммәттәр нигеҙе юҡҡа сыға. Ә быларға аҡыл менән яраҡлашып өлгөрөүе шул тиклем ауыр. Ошоларҙы уйлайһың да, ярай әле, сәнғәт - театр, музейҙар, картина галереялары бар, тип ҡуяһың. Халыҡ был урындарҙы һаман да изгеләштерә, сөнки уларҙа уның күңеле ял итә. Кеше тын алырға тейеш әҙерәк көндәлек тормоштан. Ә театр, бигерәк тә милли театр, тап ошондай урындарҙың береһе.

## Яңылышырға ла хоҡуғы бар

Әҙәбиттә шиғырҙар бар, уның ҡыҫҡаһы, оҙоно - поэмаһы бар, проза яратыусылар өсөн романы, повесы бар. Шуның кеүек, театр репертуарында ла төрлө спектаклдәр, әйтәйек, эксперименталь спектаклдәре лә, "Ҡоҙаса"һы ла булһын. Башҡорт театры халыҡтың ҡыҙыҡһыныуҙарын күҙәтергә, әммә милли әҫәрҙәрҙән тыш, Шекспирҙы ла уйнарға тейеш. Үҙ дәүерендә башҡорт тамашасыһы Арыҫлан ағай Мөбәрәковтың Отеллоһын күреп, уның өсөн ҡайғырып, тетрәнеп ҡайтҡан. Улар Отелло өсөн ҡайғырмағандар, ә артистың уйнауына һоҡланып, күңелдәрен байытҡандар. Әгәр ҙә бөгөн тамашасы ҡайһы бер спектаклдәргә һирәк йөрөй икән, был спектаклдең насар булыуы тураһында һөйләмәй, тамашасы өсөн һайлау мөмкинлеге һәр ваҡыт булырға тейеш. Репертуарҙағы төрлө жанрҙағы һәр спектаклгә изге башланғыс, изге ниәт һалынған.

Шулай ҙа театрҙың репертуар һайлағанда яңылышырға ла хоҡуғы бар. Әгәр ҙә гел генә уңышҡа эшләһә, ул театр булмай. Театр - ул бит ижад, театрҙағы ижад, етмәһә, коллектив ижад. Спектакль ҡуйыу өсөн артистары, режиссеры, композиторы, рәссамы, тегеүселәре, һ.б. кәрәк. Умарталағы ҡорттар һымаҡ, уларҙың һәр береһенең үҙ вазифаһы, әммә улар бөтәһе бергә бер умартаны хасил итә. Һуңғы арала спектаклдәргә халыҡ күпләп йөрөй, хатта билеттар алдан һатылып бөтә. Тимәк, халыҡта аң, матурлыҡҡа ынтылыш уяна, улар үҙ асылына ҡайта башланы, тип бик тә ышанғым килә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Станиславский исемендәге премия тапшырыу тантанаһында Алексей Бартошевич Олег Хановтың "Ричард III" спектаклендәге Ричард ролен телгә алып, шулай тигәйне: "Был мин күргән иң яҡшы Ричард! Әйтергә кәрәк, ул бик ҡурҡыныс роль. Сөнки актер геройының яуызлығы тыуҙырған ялтырауыҡҡа әүрәп, уны ниндәйҙер кимәлдә аҡлай башлай. Әммә Хановтың геройы әхлаҡи яҡтан бик яҡшы эшләнгән, сөнки уның геройының ҡылыҡтары өсөн аҡланғыһы ла, ғәфү үтенгеһе лә, хатта көс һәм власть алдында таң ҡалыу теләге лә юҡ. Былар уның ижады тураһында ғына түгел, ә кешелек булмышы хаҡында ла һөйләй". Әңгәмә барышында Олег Закир улы үҙенең ролдәре тураһында артыҡ һүҙ әйтмәһә лә, ошо баһа уны актер булараҡ та, кеше булараҡ та тулыһынса аса, минеңсә. Заман менән бергә үҙгәрергә мәжбүр булған хәлдә лә, XXI быуаттағы милли театрҙың сәхнәһендә тап ана шул әхлаҡлылыҡ, ябайлыҡ, ихласлыҡҡа урын мотлаҡ булырға тейеш.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

***✓ Гөләйшә әйтмешләй, бер үҙең булған саҡта ла яңғыҙ түгелһең - икенсеһе Алла. Әгәр янында икенсе берәү булһа - өсөнсөһө Алла. Бары тик Раббыны ихлас йөрәк менән ҡабул ҡылып, Уның ҡөҙрәтенә тәрән инанырға кәрәк.***







Яңғыҙлыҡтан тамам биҙрәгән Ғәйшә әбей һуңғы йылдарҙа дингә һыйынды. Был донъяла ике ауырлыҡ бар: береһе - үлем, береһе - яңғыҙлыҡ тигән хәҡиҡәттәрҙең һуңғыһы башына төшкәс, ул тәүҙәрәк ауылдағы ҡайһы бер яңғыҙаҡ бисәләргә эйәреп, эскегә бирелеп ҡараны. Йәнәһе, өлөшөнә яҙған тормош әсеһен унаң үҙенән яман асы эсемлек менән баҫа, әхүәлен еңеләйтә. Эйе, еңеләйтерһең, еңеләйтмәй ни! Һүҙ юҡ - иблис һыуһынының тәүге йотомдары, башты еңелсә әйләндереп, хәсрәтле уйҙарҙан арындыра, кәйефте күтәрә. Үҙеңде һүҙ менән аңлатып булмаҫлыҡ рәхәтлектән туҡылған икенсе донъяға барып юлыҡҡандай хис итәһең. Әлеге ләззәт тойғоһоноң оҙағыраҡҡа һуҙылыуын теләйһең. Ә уның өсөн баяғы кәйеф сығанағы менән тамаҡты өҫтө-өҫтөнә сылатып торорға кәрәк. Ғәҙәттә, бындай сылатыуҙар, йәки халыҡ телендәгесә, Хабаровскиға китеүҙәр, бер нисә көнгә һуҙыла. Тик һәр бер сәйәхәттең аҙағы булғандай, барыуҙың ҡайтыуы бар шул. Аһ, әлеге Хабаровскиҙан ҡайтыуҙарҙың михнәттәре!.. Уны тик башына төшмәгән әҙәмдәр генә белмәйҙер. Юл йөрөү ауырлығы менән сағыштырыр өсөн ҡулланылған гүр ғазаптары ары торһон. Ярай ҙа, иҫән-һау ҡайта алһаң! Ә бит унан әйләнеп ҡайта алмайынса, туп-тура йәһәннәмгә олаҡҡандар ҙа бар. Һуңғы осорҙа бындай әҙәмдәрҙең һаны күбәйгәндән-күбәйә.

Тормошо тәүлектең эңерен хәтерләткән шундай яманһыу көндәрҙең береһендә Ғәйшә әбейгә район үҙәгендә йәшәгән һеңлеһе Гөләйшә шылтыратты. Апаһын электән эсе күргән ҡатын, ҡан ҡәрҙәшенең аймыл юлға тартылыуынан шөбһәләнеп, һуңғы арала хәл-әхүәл белешеүен бермә-бер йышайтҡайны. Ғәҙәттәге һүҙ башынан аҙаҡ бөгөн улар араһында ошондай һөйләшеү булып алды:

- Апай, әллә һин дә намаҙға баҫып ҡарайһыңмы?

Бер аҙға урынлашҡан тынлыҡтан һуң сымдың теге осондағы Ғәйшә әбей телгә килде:

- Һин мине сәпсим юҡҡа сыҡҡан кешегә һанайһың инде?..

- Юҡсы, апай... Улай тип уйлаһа, шундай хәбәр һөйләйме кеше?

- Әсәй мәрхүмә: "Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?" - ти торғайны. Шуның шикелле, бер оянан ике абыстай буламы?

- Эй, апай, ҡыҙыҡһың да инде! Ғибәҙәт ҡылған һәр кем мулла йәки абыстай булалыр шул. Бында бөтә ғаиләләре менән намаҙ уҡығандар бар.

- Уҡый инде... Мәсет өҫтө булғас ней...

- Намаҙға тороу өсөн мәсет кәрәкмәй. Һин бына әсәйҙе иҫкә алаһың. Ә бит уның: "Әҙәм көлдөрөп йөрөйһө булмағыҙ", - тигән һүҙе лә бар ине.

Ғәйшә әбейҙең тауышы һиҙелер-һиҙелмәҫ үсегеү ғәләмәте менән ҡуша яңғыраны:

- Әллә!.. БыҒаса берәүҙең дә көлгәнен ишеткәнем юҡ ...

- Һы! - тине Гөләйшә. - Кешенең алдан түгел, арттан көлә торған ғәҙәте барлығын белмәйһеңдер шул! Тормошоң шулай дауам итһә, теймә-бер әҙәм йөҙөндән алыр көнгә лә күп ҡалмаҫ.

- И-и, һеңлекәйем! - тип әсенде Ғәйшә әбей. - Һин Аллаға рәхмәт уҡыр өсөн намаҙға баҫҡанһың. Алғыш әйтерлегең бар - тормоштан уңдың, бәхетлеһең. Ә минең яҙмышым рәхмәт уҡырлыҡмы ни?

- Ҡуйсы, апай. Яҙмышҡа рәнйеү - Аллаға рәнйеү менән бер. Һәр кешенең ғүмере - Хоҙай бүләге. Әҙәм балаһына тәҡдир ҙә Уның тарафынан һынау өсөн бирелә...

Мәсеткә йөрөп, әлифте таяҡтан айырырға өйрәнгән, намаҙға тороуына дүрт-биш йыл үткән Гөләйшә ул көндө апаһын иман юлына баҫырға оҙаҡ ҡына өгөтләне. Өмөтһөҙлөккә бирелеүҙән, рухың һыныуҙан һаҡланыуҙың берҙән-бер юлы дини инаныс икәнен аңлатырға тырышты, Аллаға һыйынып, яңғыҙлыҡтан ҡотолоу осраҡтарын бихисап миҫалдар менән ныҡытты.

Һәм һынды Ғәйшә әбей, күнде. Яңғыҙлыҡтың йән иҙгес ҡотһоҙлоғонан ҡайһы саҡта башын ташҡа орор хәлгә еткәс, күнмәй ҡайҙа барһын инде... Ә былай, исмаһам, ни тиһәң дә, рухи таяныс, үҙе бер таймаҫ терәк. Гөләйшә әйтмешләй, бер үҙең булған саҡта ла яңғыҙ түгелһең - икенсеһе Алла. Әгәр янында икенсе берәү булһа - өсөнсөһө Алла. Бары тик Раббыны ихлас йөрәк менән ҡабул ҡылып, Уның ҡөҙрәтенә тәрән инанырға кәрәк.

Ғәйшә әбейҙең күңеле, ысынлап та, рухи таяныҫҡа, ышаныҫҡа бик мохтаж ине. Бөткөһөҙ уйҙарҙан уйылып китмәле яңғыҙлыҡты көндөҙҙәрен кисереүе еңелерәк: йә йорт-ҡураланы эш-көшкә әүрәйһең, йә урамға сығып, күрше-күлән менән аралашаһың. Унан ҡалһа, һирәкләп берәйһе килә лә, уның менән хәбәр һөйләшеп, эс бушап ҡала. Ә бына төндәрен!.. Еңелерәк тиһәң дә, яңғыҙлыҡ көндөҙ ҙә шәрбәт түгел, сөнки өй араһындағы арлы-бирле эшең тотоноп та өлгөрмәҫтән тамамлана. Гел генә урам ҡыҙырып йөрөһәң, "ауылсы" тигән ҡушамат тағыуҙары бар. Гәпләшеп ултырыр серҙәштәр ҙә онотҡанда бер генә инеп сығыусан. Ярай әле, көңгөр-ҡаңғыр килеп йөрөргә өйҙә бесәйе, ихатала ике һарығы бар, юғиһә, аҡылға зәғиф булып ҡалыуыңды көт тә тор. Ул мәхлүктәр яуап ҡайтарыу ҡөҙрәтенән мәхрүм булһалар ҙа, һәммәһен аңлай, ҡоромағырҙар. Ана, яңыраҡ теге һарыҡтарҙың береһе йәйҙәүесләгәйне. Бәрәстәре игеҙ - береһе тәкә, икенсеһе орғасы. Ғәйшә әбей, йортона ҡот килтергән һарығын бер нисә көн ихатала тотҡандан һуң, бәрәстәрҙе тамам утыҡҡанға һанап, көтөүгә ҡыуҙы. Иртәнсәк дүртәүләшеп ҡуранан сығып киткән һарыҡтар кискеһен өйгә өсәү генә ҡайтты - бәрәстәрҙең берәүһе ҡайҙалыр тороп ҡалғайны. Быны күргән Ғәйшә әбей һарығына ябырылды:

- Бәрәстәреңдең берәүһен ҡайҙа итеп киттең, бисура? Ҡарап йөрөмәҫкә, күҙең сыҡҡанмы әллә? К...дән килмәгәс, ниңә икәү итеп тороп бәрәнләнең, ә?..

Әмәлгә ҡалғандай, бәрәстәрҙең тәкәһе ҡайтмағайны. Хужабикә уның да тетмәкәйен тетте:

- Зимагур! Тыуып өлгөрмәгән, аҙғын яғы әйләнеп тә тора! Темеҫкенмәһә, тәкә тигән исеме юғалыр! Иркәк булдымы бер мал - һуйып ашауҙан башҡаға эшкинмәй!..

Ғәйшә әбей туҙынып ҡына ҡалманы - күҙен мөлдөрәтеп ғәйепле төҫтә хужабикәгә текләп торған һарыҡты кире урамға сығарып ебәрҙе:

- Бар, торма бында йән көйөгө булып! Бәрәсеңде эҙләп тапмаһаң, минән яҡшылыҡ көтмә!

Хужабикәһенең һәр бер һүҙен диҡҡәт менән тыңлап торған һарыҡ баҡыра-баҡыра урам буйлап китте һәм күп тә үтмәҫтән, аҙашып тороп ҡалған бәрәсен эйәртеп ҡайтты. Ошонан һуң һарыҡты аңра тип әйтеп ҡара!

Унан ҡалһа, Ғәйшә әбей бесәйе менән бер яҡлы әңгәмә ҡороп ала:

- Нимә, элмәнләйһең? Әле генә ашаның бит... Уф, мәскәй, ҡасан туйырһың икән?..

- Тағы өҫтәлгә менденме, аскернә! Холоҡһоҙланып йөрөй бирһәң, берәй ергә апарып, аҙаштырып китәм икән...

- Мин иҙән йыуып бөткәнсе тик кенә ултырып булмаймы ни, оятһыҙ! Аяҡһып, әбизәтелнә кибер-кипмәҫ иҙәнде тапарға кәрәк. Бар, сығып кит, күҙемә күренмә!..

* * *

Гөләйшә ярҙамында намаҙға баҫҡандан һуң, Ғәйшә әбейҙең яратҡан мәхлүктәре менән бындай әйтемләшеүҙәре һирәгәйҙе. Намаҙға баҫыу тигәс тә, ул көнөнә биш мәртәбә ғибәҙәт уҡыуҙан ғына тормай. Үҙеңде Аллаһы Тәғәләгә тулыһынса бағышлайым тиһәң, дингә ҡағылышлы ғилемде өйрәнеү фарыз. Ә бының өсөн төрлө дини китаптар уҡырға, яңынан-яңы аят-сүрәләр ятларға кәрәк. Өҫтәүенә, уның намаҙға баҫҡаны асыҡланғас та, абыстай итеп төрлө аят мәжлестәренә саҡырыуҙар башланды. Бына ошондай дингә, иманға ҡағылышлы сауаплы ғәмәлдәрҙе үтәүгә байтаҡ ваҡытыңды сарыф итергә кәрәк ине.

Апаһын дини әҙәбиәт менән Гөләйшә тәьмин итеп торҙо. Күберәген татар телендә нәшер ителгән китапсыҡтарҙың, гәзиттәрҙең ниндәйе генә юҡ: дини тәғлимәт нигеҙҙәре, намаҙ уҡыу тәртиптәре, доғалыҡтар, хәҙистәр, бәйғәмбәрҙәр тарихы һәм башҡалар. Ғәйшә әбей бигерәк тә татарса һәм башҡортса баҫылған дини календарҙарҙы уҡырға ярата. Уларҙа мосолманға кәрәкле бөтә мәғлүмәт тупланған: намаҙ ваҡыттары, әхлаҡ, шәриғәт ҡанундары, ҡыҫҡа доғалар, ислам тарихы, Ҡөрьән тәфсире. Уҡырға теләгең менән ваҡытың ғына булһын!..

Бер көндө өйлә намаҙынан һуң кәйефе уғата күтәрелгән Ғәйшә әбей ҡулына Ҡаҙанда баҫылып сыҡҡан "Ғәлләм Болғари календары"н алды. Уны яңыраҡ, район үҙәгендәге мәсеттән һатып алып, Гөләйшә бүләк итеп киткәйне. Календарҙың күңеленә хуш килерҙәй биттәрен ҡараштырып ултырғанда, күҙенә ризыҡ тураһындағы бер яҙыу салынды: " ... Иртәнге ашты бер үҙең генә ашау - шайтан менән бергәләп ашауҙыр..."

Бына һиңә мә!.. Ишетмәһәң, ишет иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! Ғәйшә әбейҙең өҫтөнә ҡапыл эҫе һыу һиптеләрме ни! Ул ҡолаҡ остарының яна башлауын тойҙо. Был кинәт көйәләнеүҙән ҡан баҫымының күтәрелә башлауын аңлата ине. Күҙ алдары сыбарлана башлауға ҡарамаҫтан, әбей календарҙы йөҙөнә яҡыныраҡ килтереп, тағы бер ҡат уҡып сыҡты - бәлки, яңылышалыр?.. Юҡ, аҡҡа ҡара менән яҙылған баяғы һөйләм уның йөрәген йәнә берҙе көйҙөрөп үтте. Тимәк, рәхимһеҙ яҙмыш тарафынан ҡыйырһытылған Ғәйшә әбей әллә нисәмә йылдар буйы шайтан менән табындаш булған. Ул яңғыҙлыҡты һорап алғанмы ни? Ә һуң ошондай яҙмышҡа дусар булғандар әҙме был донъяла?

Ғәлләм Болғари календарындағы сәйер яҙманы шәхсән үҙенә төбәлгән мыҫҡыл рәүешендә ҡабул иткән Ғәйшә әбей бер нисә көн шаңҡып йөрөнө. Ятһа ла, торһа ла башында бер уй: "Шайтан табындашы!.. Шайтан табындашы!.." Ниндәй мәсхәрә! Ҡайғырыуҙан, хурлыҡтан был көндәрҙә әбейҙең тамағына аш бармай йөҙәтте хатта. Сәй ҡайнатып, элеккеләй ирәйеп китеп ауҡатланырға әҙерләнһә генә, өҫтәл арьяғындағы ҡаршы ултырғыста шөкәтһеҙ бер йән эйәһе пәйҙә булғандай тойола. Тәне зымбырлап ҡуйған әбей хатта уның төҫ-ҡиәфәтен дә сырамытҡандай: элегерәк ололар һүрәтләгән кеүек кәзә тояҡлы, сусҡа башлы. Ҡойроғо һыйырҙыҡы һымаҡ оҙон, ауыҙынан бармаҡ оҙонлоғондай ике эт теше һерәйеп күренә. Тьфү, мәлғүн!.. Кәйефе ҡырылған, тамаҡланыу ҡайғыһы киткән Ғәйшә әбей, белгән доғаларын уҡый-уҡый өҫтәл артынан тора ла, тәүбә намаҙы уҡыр өсөн тәһәрәт яңыртырға керешә.

Бер нисә көн аңҡы-тиңке булып йөрөгәндән һуң, Ғәйшә әбейгә аныҡ фекерләү ҡеүәһе әйләнеп ҡайтты. Әҙерәк тыныслана биргәс, баяғы һүҙҙәрҙең айышына төшөнөргә тырышты. Нимәне күҙ уңында тота, ниҙе аңлата был һөйләм? Йәштән өйрәнмәгәс, дин ғилемен аңлап етмәүебеҙҙең бер ғәләмәтеме был? Әллә дин әһелдәренең тормош ысынбарлығын белеп етмәүеме? Календарҙы төҙөгән кеше ғәрәп илдәрендә уҡып ҡайтҡан бик уҡымышлы кешеләр, моғайын. Үҙенә хат яҙып ебәрергәме әллә? Килешер микән? Ә ниңә килешмәһен?..

Ниәт - ғәмәлдең яртыһы, тигәндәй, Ғәйшә әбей оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, хатының мөрәжәғәт өлөшөн яҙып та ҡуйҙы: "Әссәләмүғәләйкүм үә рәхмәтуллаһи үә бәрәкәтуһ, мөхтәрәм Ғәлләм Болғари әфәнде! Был хатты һеҙгә алыҫ Башҡортостандан дини ҡәрҙәштәрегеҙҙең береһе Ғәйшә апайығыҙ яҙа..."

Хаттың хәл-әхүәл һәм сәбәп өлөшөнән һуң Ғәйшә әбей төп һүҙгә күсте:

"... Мин ябай ғына бер ҡатынмын. Һеҙ бик яҡшы беләһегеҙҙер: совет заманында беҙ дини тәрбиә алыуҙан мәхрүм инек. Ярай әле, бәхетебеҙгә күрә үҙгәртеп ҡороуҙар башланды, дин тотоуға ихтыяр бирелде..."

Ошо ерҙә Ғәйшә әбей, ручкаһын яҙып ултырған ҡағыҙы өҫтөнә һалып, уйҙарға бирелде. Эйе, дингә мөнәсәбәт үҙгәрҙе, тик бигерәк һуң түгелме? Үрмәксенән күрмәксе, тигәндәй, яҡын-тирәлә мәсет төҙөүҙәр йышайҙы. Тик, халыҡ әйтмешләй, мәсете булһа, имамы юҡ, имамы булһа, иманы юҡ. Ишетелеүенсә, мәсеттәрҙең буш торғандары ла бар. Халыҡ йөрөмәй, тиҙәр. Бигерәк тә ир-ат битараф. Ә уларһыҙ - донъя һаңһыҙ. Их, саҡ ҡына иртәрәк булһасы был үҙгәртеп ҡороуҙары! Ошонан илле-алтмыш йыл элек халыҡ, бер ниндәй тыйыуҙарға, эҙәрлекләүҙәргә ҡарамайынса, дини йолаларҙы үтәргә тырыша ине. Ул замандарҙы уйлаһа, Ғәйшә әбейҙең һәр саҡ әсәһе хәтеренә төшә. Ураҙа айы етһә, ул көн һайын өйҙөң тәҙрәләрен кистән ҡалын юрғандар менән томалап ҡуя. Өсөнсө класта уҡып йөрөгән Ғәйшә:

- Әсәй, ниңә тәҙрәләрҙе ҡаплап ҡуяһың ул? - тип һорай.

- Таңда сәхәр эскәндә ут күренмәһен өсөн.

Ҡыҙыҡай артабан төпсөнә:

- Ә ут күренһә, нимә була?

- Саҡыртып әрләйҙәр йәки штраф һалалар, - ти әсә.

Ғәйшә һаман төбәшә:

- Ә кем улайта?

- Силсәүит...

**(Дауамы бар).**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# КЕШЕ ҺӘМ ТӘБИҒӘТ -

## бер бөтөн



**"Киске Өфө" гәзите уҡыусыларҙы башҡорт рәссамдары менән таныштырып, бик изге эш эшләне әле. "Ғүмер ағаҫы" картинаһы авторы Фәнил Шәймөхәмәтовты ла быға тиклем күптәр белмәгәндер.**

Башта рәссам, уның ижад итеү ысулы тураһында бер нисә һүҙ әйткем килә. Сығышы менән Әлшәй районынан булып, әле Ишембай ҡалаһының һынлы сәнғәт мәктәбендә балаларға белем биреүсе Рәсәй рәссам-графигы, РФның Рәссамдар берлеге ағзаһы Фәнил Шәймөхәмәтов һынлы сәнғәт күгендә үҙенә генә хас стилдә, йүнәлештә эшләгән рәссам булараҡ танылған. Уның "Ҡымыҙ", "Минең тыуған яғым", "Ауылым сәскәләре", "Ҡаҙ йолҡоу" һ.б. картиналары төрлө күргәҙмәләргә ҡуйылған. 2007 йылда Һарытау ҡалаһында Рәсәй Рәссамдар берлеге үткәргән "Алтын палитра" бәйгеһендә Фәнил Шәймөхәмәтов үҙенең "Салауаттың юлы" исемле картинаһы менән Гран-при яулап, лауреат исеменә лайыҡ булды.

Рәссам үҙенең төҫлө линогравюраларын бик ҡатмарлы техника менән ижад итә. Һүрәтте ул төҫҙө линолеумға һырлап эшләй, аҙаҡ уларҙы ҡырҡып ала, төҫтәргә буяй, шунан һәр бер төҫлө өлгөләрҙе айырым ҡағыҙға баҫа. Бер бөтөн картина хасил булһын өсөн уға әллә күпме клише эшләргә кәрәк.

Тыуған яғы, уның кешеләре, ауыл тормошо, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәре темаһына яҙылған картиналарында тыуған Башҡортостанына, Әлшәйенә булған һөйөү сағыла. Уларҙа анығ ысынбарлыҡ менән абстракт төшөнсәләрҙең бергә үрелеп барыуы бер бөтөн фәлсәфәүи мәғәнәне барлыҡҡа килтерә. Шулай итеп, рәссам үҙ әҫәрҙәрендә ҡаҙимге тормошто эпик бейеклектәргә күтәреп һүрәтләү дәрәжәһенә өлгәшә. Фәнилдең күп һүрәттәрендә ярым айҙы күрергә була, йә юлды, йә Ерҙе, йә уралтың хәтерләтә ул. Рәссамдың һәр бер әҫәре ныҡлы уйланылған композицияға һәм сюжетҡа ҡоролған. Уның һүрәттәренән роман биттәренә һыйырлыҡ ҙур бер тарих "уҡырға" була.

"Ғүмер ағаҫы" исемле картинаһын алғанда, минеңсә, уны "Шәжәрә" тип тә атап булыр ине, сөнки улар бер үк мәғәнәгә эйә һүҙҙәр. Һәр кеше, ғүмеренең байтаҡ өлөшөн үткәс, үҙенең шәжәрәһен барлай. М. Өмөтбаев әйтмешләй, һәр башҡорт йондоҙҙарҙы танырға, легенда-риүәйәттәрҙе өйрәнергә, шәжәрәһен белергә тейеш. Яҙыусыларҙың автобиографик әҫәрҙәре, мемуарҙар шулай уҡ шәжәрәнең бер төрө, тип уйлайым. Шәжәрә байрамдары үткәрелә, иң яҡшы шәжәрә төҙөүсегә конкурс иғлан ителә.

Рәссам-график Фәнил Шәймөхәмәтовтың "Ғүмер ағаҫы" картинаһының төп геройы - аҡһаҡал да үҙ шәжәрәһен барлай. Ярым ай формаһындағы Ер өҫтөнә башҡортса аяҡтарын бөкләп ултырған ҡарт уҙамандың үтеп барған ғүмер юлын, эшләгән эштәрен, баштан кисергәндәрен, йөрәктә булған иң ҡәҙерле иҫтәлектәрен күҙ алдынан үткәргән мәлен төшөргән рәссам. Ата-бабалар васыятын еренә еткереп үтәгән аҡһаҡал: улдар үҫтергән, йорттар һалған, ағастар ултыртҡан. Балалары, ҡоштар кеүек, атай йортонан осоп сығып, ауыл-ауыл булып ултырғандар. Ул ултыртҡан ағастар, урман булып, Ер өҫтөн ҡаплаған. Ә хәҙер олатайға ейәнейәнсәрҙәренә, бүлә-бүләсәрҙәренә аҡыллы кәңәштәрен биреп ултырыр мәл еткән. Уның ҡулындағы яңы бөрөләнеп килгән ағас үҫентеһе шуға ишара яһай.

Рәссамдың ҡояшты һынландырған түңәрәк эсендәге һүрәттәре олатайҙың уйҙарын аңлата. Бысылған меңйәшәр йыуан ағастың төбөндәге һәр бер бүлем аҡһаҡалдың шәжәрә ағасының бик тарбаҡлы булғанын күрһәтә. Ата-бабалары күптән гүр эйәһе булған, үҙе лә олоғайған, ләкин ғүмер ағасынан яңы ботаҡтар шытып сыҡҡан, улар матур йәш япраҡтар менән ҡапланған. Быны менән рәссам тормош дауам итә, тип әйтергә теләй.

Һүрәттә бөтөн тереклекте тыуҙырыусы һәм булдырыусы Ҡояш һәм Ер-әсә картинаның үҙәген алып тора. Ҡояштан килгән тулҡын-тулҡын нурҙар һәм йылылыҡ - бар тере йәнде йәшәтеүсе. Шулай итеп, кеше һәм тәбиғәттең бер бөтөн булып йәшәүе тағы ла бер иҫбатлана. Тирә-яҡ мөхиткә кеше ни тиклем яҡшы мөнәсәбәттә була, ул да кешегә шулай яуап бирәсәк. Тәбиғәттең бер өлөшө булған йылғалар, күлдәр ҙә кешенең ҡурсалауына мохтаж. Һүрәттәге ярым ай, түңәрәк формаһындағы график фигуралар, минеңсә, кешенең тәбиғәт менән гармониялы тормошон һүрәтләй.

Картинаның өҫтөндәге контраст төҫтәрҙән торған орнаментлы ике түңәрәк тамға-талисман, уйымса, аҡһаҡалдың ырыу тамғаһы ла, шул уҡ ваҡытта уның ғаиләһенә, әлләнисә быуынына татыулыҡ һәм тыныслыҡ, ғаилә именлеге һәм бәхет килтереүсе, ата-олаталарының улдары, ейәндәре менән ризалыҡта, яҡшы мөнәсәбәттәрҙә йәшәүен күрһәтеп тороусы символ булып тора. Был - бик бәхетле, күп быуынлы, күп емешле ғүмер ағасы.

Тәбиғәтте, космос есемдәрен, ябай кешене бер бөтөн итеп һүрәтләп, рәссам ҡаҙимге тормош артындағы мәңгелек рухи ҡиммәттәрҙең һулышын тойорға ярҙам итә. Ысынлап та, кеше ғүмере бик ҡыҫҡа, ә тәбиғәт мәңгелек. Кеше тыуа, үҙенә юғарынан бирелгән ғүмер юлын үтә, баҡыйлыҡҡа күсә... Ә уның ҡылған яҡшы эштәрен балалары дауам итә. Атаһына ҡарап, улы уҡ юна, әсәһенән күреп, ҡыҙы тун бесә. Тик үкенестәр менән генә иҫкә алырға яҙмаһын инде үткән ғүмереңә йылдарын. Һинең һуң Ерҙә ни ҡалыр? Быуа ошондай фәлсәфәүи уйҙар тыуҙыра рәссам Фәнил Шәймөхәмәтовтың "Ғүмер ағаҫы" һүрәте.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

АФАРИН!

# КИТАП...

## балаларға бүләккә

**Әҙәбиәт төшөнсәһе, әлбиттә, кескәйҙәр өсөн тәғәйенләнгән әҫәрҙәрҙән башланырға тейеш. Ә бөгөнгө көндә балалар әҙәбиәте ниндәй хәлдә һуң? Был темаға ҡарата яҙыусылар араһында төрлө ҡараш йәшәп килә: берәүҙәр "Әй, балаларға ярамағанмыни, тоттоң да яҙҙың, уның нимәһе бар", - тип ҡараһа, икенселәре быны киреһен иҫбатларға тырыша. Ошоноң икенселәре араһына ҡараған бер төркөм яҙыусылар балалар өсөн антология төҙөп, ҙур эш башҡарып сыҡты ла инде.**

Антология өс китапты берләштерә: беренсеһе китапханалар буйынса тарала ла башлаған инде. Уны иң беренселәрҙән булып алдырыусы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһының балалар уҡыу үҙәге Әҙәбиәт йылын ошо антологияның презентацияһын үткәреү менән башлап ебәрҙе. Сараға был баҫманы төҙөүгә күп көс һалған балалар яҙыусыһы Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина һәм Әлфиә Әсәҙуллина, улар менән осрашыуға Өфөнөң 42-се, 49-сы мәктәбенең 3-сө класс уҡыусылары саҡырылғайны. Сара бик йәнле үтте: балалар күҙәтеүсе генә булып ултырманы, ә үҙҙәре лә әүҙем ҡатнашты. Улар балалар антологияһына ингән әкиәттәрҙе сәхнәләштереҙе, яҙыусылар менән бер рәттән үҙҙәренең тәүге ижад емештәре менән таныштырҙы, һорауҙар бирҙе. Баҫманың презентацияһын ойошторуға китапхананың хеҙмәтләндереү бүлеге етәксеһе Светлана Харисова бик етди ҡараған, кескәйҙәр ялҡып китмәһен өсөн ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына сығыштар, һорау-яуап, шиғырҙар уҡыу, өҙөктәр сәхнәләштереү һәм башҡа күренештәр, бер-береһенә тығыҙ үрелеп барҙы.

Ғөмүмән, китапхана коллективының татыу, берҙәм, бер төптән эшләүе һоҡланыу уятты. Улар уҡыусылары менән эшләүҙең яңы алымдарын эҙләй, яңынан-яңы идеялар менән сығыш яһай. Мәҫәлән, бында медицина университетының педиатрия бүлеге талиптары йыш ҡунаҡ - фәнни эш менән шөғөлләнеүсе талиптар балалар алдында үҙҙәренең лекциялары менән сығыш яһай. Шәп бит, бер атыуҙа - ике ҡуян, кескәйҙәр сәләмәт тормош алып барыу серҙәренә төшөнә, ә талиптар ораторлыҡ оҫталығын арттыра.

Китапханасыларҙың фантазияһына иҫ китерлек: улар, әлекке кеүек, уҡыусылар килеүен көтөп ултырмайҙар, ә үҙҙәре уларға ҡунаҡҡа баралар. "Изгелекле китапхана" акцияһы сиктәрендә даими рәүештә республиканың инвалид балаларҙы дауалау үҙәгенә барып сығыш яһайҙар, яңы китаптар менән таныштыралар. Китаптарҙың күп төрлө булыуы балаларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята: тауышлы, көйлө, панорамалы, уйынсыҡ китаптар, бала үҙе буяй торған, китап-пианино, китапксилофон һәм башҡалар. Китапхана яҙыусышағирҙар ғына түгел, башҡа ижади өлкәлә эшләүселәр ҙә, мәҫәлән, фокусниктар, жонглерҙар, артистар ҙа йыш ҡунаҡ. Мин үҙем "костплейерҙар" тигән терминды тәүге тапҡыр бында ишетеп, бик ныҡ аптыраным. Костплейер үҙе костюм уйлап сығарған ижад кешеһе була икән, мәҫәлән, ул кеше-бесәй костюмын тегә, бөтә ергә шуны кейеп йөрөй, реклама яһай, таныштыра. Хатта улар үҙҙәренең төркөмө менән ҡайҙалыр осраша, аралаша икән. Китапхана шулай уҡ каникул, ял ваҡыттарында диско-китапхана эшләй: өлкәндәр өсөн дискотека үткәрелә, а тәнәфес ваҡытында яңы китаптар буйынса төрлө уйындар, бәйгеләр ойошторола.

Үҙ эшенә етди, талапсан ҡараған, күңелдәрен һалып эшләгән хеҙмәткәрҙәр бында бик күп. Уларҙың береһе - башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү залында эшләүсе Земфира Байымова. Ул хеҙмәтләндергән бүлек яҡты, таҙа, эстетик яҡтан зауыҡлы итеп биҙәлгән, һәр күргәҙмә уйлап, еренә еткереп эшләнгән. Ғөмүмән, балалар уҡыу үҙәге күңелдә иҫ киткес матур тәьҫораттар ҡалдырҙы.

**Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ОҘАҠ ЙӘШӘЙЕМ, ТИҺӘҢ...

■ "Sleep Health" журналында баҫылған яңы мәғлүмәт буйынса, бала һәм үсмер саҡта иртә йоҡларға яратмау һуңынан йоҡоһоҙлоҡҡа килтереүе ихтимал. 1103 кешенән алынған яуаптарҙың һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, 6-17 йәштәге балаларҙың 90 проценты етерлек йоҡламай, һуңғараҡ уларҙа психологик тайпылыштар башлана: эмоциональ фон боҙола, уҡыуға һәләтлелек түбәнәйә, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килә, наркотиктар ҡулланыу хәүефе арта. Ҡағиҙә булараҡ, төндә йоҡламаған балалар төрлө электрон ҡоролмалар ҡуллана, ә уларҙың экраны тәбиғи булмаған яҡтылыҡ бүлеп сығара. Көн тәртибен күҙәткән, ваҡытында йоҡларға ятҡан, төндә - планшеттар, ә иртән кофеин менән артыҡ мауыҡмаған ғаиләләрҙә йоҡоһоҙлоҡ менән бәйле проблемалар осрамай.

■ Япон кухняһын яратыусыларға умами тигән тәм биргес яҡшы таныш. Был тәмде натрий глутаматы бирә. Күптәр натрий глутаматына кире ҡараште булһа ла, ысынында иһә глутамат кешенең тәнендә бар һәм ул нервы күҙәнәктәре араһында электр сигналдары ташый. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, умами тәме өлкән кешеләрҙең сәләмәтлеге өсөн файҙалы. Япония ғалимдары билдәләүенсә, натрий глутаматы һәм башҡа тәм көсәйтеүселәрҙең тағы бер ыңғай яғы бар - улар файҙалы, ләкин тәмһеҙ ризыҡты ла тәмлегә әйләндерә.

■ Табиптар әйтеүенсә, оҙаҡ йәшәү өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Бәктиһән, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йоморҡа, ит, һөт аҙыҡтарын улар аҙыраҡ ҡуллана. Оҙаҡ йәшәүселәр кәңәшенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Кәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙенә яраҡҡан аҙыҡтарынды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә эшһеҙ торорға тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

■ Туңдырма яратыусыларға тағы бер яҡшы яңылыҡ: Британия ғалимдары кәйеф булмағанда туңдырма ярҙам итә, тип раҫлай. Улар туңдырманың мөғжизәле сифатына ғилми аңлатма ла тапҡан. Лондон тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре был татлы ризыҡты ашағандан һуң кешенең баш мейеһендә барған процестарҙы МРТ ярҙамында күҙәткән. Бәктиһән, туңдырма баш мейеһенең шатлыҡ тойғолары барлыҡҡа килә торған өлөшөнә йоғонто яһай икән. Был зонаны әүҙемләштереү өсөн бер балғалаҡ туңдырма ашау ҙа етә. Ғалимдарҙың иҫәпләүе буйынса, һәр кеше йылына уртаса 12 кг туңдырма ашай.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан ҡала икенсе урынды биләгән яман шеш менән сирләүселәрҙең дөйөм һанынан сығып ҡарағанда, беренсе урында - күкрәк биҙҙәре яман шеше, икенсе урында - үпкә рагы, өсөнсө урында тире рагы тора. Артабан ашҡаҙан, простата биҙе, йыуан эсәк, бөйөр шеше килә. Ауыҙ ҡыуышлығы шештәре буйынса хәл-торошто ла ҡиҫкен тиергә мөмкин.**

**Насар сифатлы шеш - күҙәнәктең генетик составы үҙгәреүенә бәйле сир. Беҙ яман шеш менән ауырымайбыҙ, ә ошо яман шеш барлыҡҡа килгәнгә тиклем йөрөйбөҙ. Хәл-торошто анализлағанда ололарҙа яман шеш күберәк табыла. Шуға күрә, яңы барлыҡҡа килгән шештәрҙе иртә стадияла асыҡлау өсөн даими рәүештә табипҡа күренергә, профилактик тикшереүҙәр үтергә кәрәк. Иртә стадияла дауалау ваҡытын үткәреп ебәрмәгәндә ғүмерҙе оҙайтырға була, сөнки табиптар ямаш шеш ауырыуҙарының 90-95 процентын дауаларға мөмкин, тип иҫәпләй. Әйтелгәнде дәлилләп, Әбйәлил районы үҙәк дауаханаһының хирург-онкологы Ринат Таңғатар улы МӘҺӘҘИЕВтың уй-фекерҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ.**



# ЯМАН ШЕШ - һуңғы хөкөм түгел

## Битарафбыҙ шул...

Тормошобоҙға заманса технологиялар инеп, эшмәкәрлегебеҙҙе еңеләйтеү, үҙебеҙгә күберәк ваҡыт бүлеү мөмкинлектәре тыуҙырылһа ла, кешегә барыбер ваҡыт етмәй. Шул сәбәпле ул хатта үҙенең һаулығына ла битараф. Шул уҡ ваҡытта, медицина алға киткән һайын, сирҙәр һәм сирлеләр һаны ла арта, ауырыуҙарҙың мутацияланған төрҙәре күбәйә. Беҙ бала саҡта мәктәптә медицина нигеҙҙәрен уҡыттылар. Ошо традицияны дауам итеп, хәҙер ҙә белем биреү системаһына медицина нигеҙҙәрен өйрәтеүсе предмет индерергә кәрәк, тип уйлайым. Уны алып барыуҙы берәй табипҡа йөкмәтергә була йәки дәресте дауаханала, медпунктта үткәрергә мөмкин. Бик булмаһа, йылына бер нисә тапҡыр класс сәғәттәрен ошо темаға бағышларға кәрәк. Һәр хәлдә, бала бәләкәйҙән үк сәләмәтлектең ни тиклем ҡәҙерле икәнен белеп үҫергә тейеш. Беҙгә, табиптарға, киң мәғлүмәт саралары аша медицина проблемаларын мөмкин тиклем күберәк күтәреү зарур. Күҙәтеүҙәремдән сығып әйтә алам: халыҡ араһында даими аңлатыу эштәре алып барылһа, баҫма матбуғатта мәҡәләләр сыҡһа, радиосығыштар булһа, кешеләр бер ни тиклем әүҙемләшеп, дауаханаларға йөрөп ала. Һуңынан тағы ла башкөллөй эшкә сумалар. Бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәр һаулыҡ өсөн ваҡыт бүлергә атлығып тормай: яҙғыһын бәпкә алып ҡарай, баҡса эштәре менән була, йәйгеһен бесән әҙерләй, көҙгөһөн үҫтерелгән уңышын йыйып алыу менән мәшғүл. Ҡышҡыһын инде һуғым мәшәҡәттәре башлана. Был осорҙа бала-саға мәктәпкә йөрөй - үҙең хаҡында хәстәрлек күреү икенсе планға күсә. Врачтарҙың ауылдарға күсмә ҡабул итеүҙәре булып тора, хатта халыҡ шунда килергә лә ваҡыт тапмай.

Һуңғы йылдарҙа яңынан тергеҙелгән диспансерлаштырыу - профилактиканың бер яҡшы ысулы ул. Ваҡыт тарлығына һылтанырға күнеккән кеше бер көн эсендә иң мөһим анализдарын тапшыра ала. Ниндәйҙер тайпылыштар асыҡланһа, уны артабан белгестәр тикшерә. Әммә был осраҡта һан артынан ҡыумайынса, сифатҡа иғтибар итергә кәрәк. Мәҫәлән, район үҙәгендә мәктәп балаларының һаулыҡ торошон тикшереү нисек тормошҡа атҡарыла? Дауаханаға 100 баланы бер юлы килтереп тултыралар ҙа, уларҙы врач алдына теҙәләр. Нисек кенә тырышһа ла, врачтар уларҙың 100-әүһен дә сифатлы итеп хеҙмәтләндерә алмай. Диспансерлаштырыуға күпләп түгел, әҙләп, мәҫәлән, көнөнә 10-15 баланы ҡабул итергә кәрәк. Белгестәр уларҙы йәйләп ултырып, ҡабаланмай ҡараһын. "Нимәгә зарланаһың, ҡайһы ерең ауырта?" тигәндә күптәр "Бер ерем дә ауыртмай, бер зарым да юҡ", тип яуаплаусан. Был балаларға ғына түгел, ололарға ла ҡағыла. Табиптарға килгәнһең икән, оялыу тигәнде онотторға кәрәк. Ентекләп һөйләһәгеҙ, врач ниндәй проблема барлығын күҙ алдына тулыраҡ баҫтырасаҡ. Юҡҡа ғына "Сирен йәшергән - үлгән" тимәгәндәр. Сирҙе йәшереп кенә еңеп булмай. Ҡала ерҙәрендә саҡ ҡына сөскөрһәләр ҙә шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итәләр, ә ауыл ерендә, үтеп китер әле, тип йөрөй бирәләр. Аҙаҡ бит һуң булыуы мөмкин.

## Яман шеш хөкөм түгел

Статистика буйынса, бөгөн яман шеш төрҙәре араһында күкрәк биҙе яман шеше беренсе урында, йәғни ҡатын-ҡыҙ хәүеф төркөмөндә тора. Был сирҙе, тәү сиратта, нәҫелдән килә, тиер инем, йәғни сир әсәһендә күҙәтелгән икән, ҡыҙы хәүеф төркөмөнә эләгә. Икенсенән, был шеш организмда гормональ тайпылыш булғанда ла барлыҡҡа килә. Нисек кенә булмаһын, ҡатын-ҡыҙ ваҡытында тикшерелеп торорға тейеш. Элек мөмкинлектәр бик булмай торғайны, ә хәҙер бөтөн шарттар, онкомаркер бар. Лабораторияла ҡанды, күҙәнәкте тикшерәләр. Маммография, УЗИ үтеү, гистологик анализ тапшырыу мотлаҡ. Әлбиттә, 35 йәштән һуң маммография тикшереүе кәңәш ителмәй, сөнки күкрәк биҙҙәренең рентген нурҙарына һиҙгерлеге кәмеүе арҡаһында һөҙөмтә түбәнәйә. 35-40 йәштә инде маммографияны бары тик белгес ҡушыуы буйынса ғына үтергә кәрәк. 40-49 йәштә - ике йылға бер тапҡыр, 50 йәштән һуң - йыл һайын тикшереү үтеү мотлаҡ. Бөгөн яман шеште йәки уның барлыҡҡа килеү ихтималлығын асыҡлау маҡсатында табиптарға ваҡытында мөрәжәғәт иткәндә, күп кире эҙемтәләрҙән ҡотолоп ҡалырға мөмкин.

Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ үҙен-үҙе лә тикшереп торорға тейеш. Гүзәл зат көҙгө алдында бөтөрөләргә ярата. Шуға, үсмер ваҡытта, ҡыҙ ҡорона ингәндә, күкрәк биҙҙәре үҫә башлағас та, көҙгөгә ҡарап, үҙгәрештәр бармы, юҡмы икәнлеген асыҡлауҙы ғәҙәткә индерергә кәрәк. Бәлки, түштең берәһе ҙурыраҡтыр, бәлки, ниндәйҙер ҡыҙарыу йәки шешеү урыны барҙыр? Әгәр шеш бар икән, күкрәк ауырта. Күрем ваҡытында ла күкрәктә ауыртыу тойола, түш шешенкерәп китә. Шундай үҙгәрештәр тойғанда мотлаҡ табиптарға - маммологтарға, хирургтарға, онкологтарға - барып күренергә кәрәк.

Әсәйҙәр - ҡыҙҙары, атайҙар малайҙары менән енси өлгөрөү, организмдағы үҙгәрештәр темаһына һәр саҡ асыҡтан-асыҡ һөйләшеп, аңғәмәләшеп торорға тейеш. Эйе, ҡасандыр был темаға һөйләшеү унайһыҙ тип һаналды, әммә бөгөн заманы икенсе. Бөтөн нәмәне дауаханаға, балалар баҡсаһына, мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Балаға был хаҡта ата-әсә һөйләмәһә, ул белемде урамдан, дуҫтарынан, төрлө компанияларҙан ала башлаясаҡ.

Ирле ҡатын-ҡыҙ күкрәк биҙе яман шешенә сағыштырмаса әҙерәк дусар була, ә инде кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙарҙа, шулай уҡ тол ҡалған ҡатындарҙа гормональ фон үҙгәрә һәм уларҙа был сир йышыраҡ осрай. Бындай категориялағы гүзәл зат гормонотерапия ала ала. Тик бының өсөн дә мотлаҡ табиптарға күренеп, анализдар тапшырып, үҙенә тап килгән терапияны алыу урынлы буласаҡ.

Тағы бер мәсьәлә: ир-егеттәргә 40 йәш тулды икән, уларҙы ла иҫәпкә алырға кәрәк. Улар йылына бер тапҡыр мотлаҡ урологта тикшереү үтергә тейеш. Сөнки күптәр тикшерелмәй йөрөй ҙә, простата шеше ныҡлап борсой башлаһа ғына табипҡа мөрәжәғәт итәләр. Ә был сирҙең дә йәйләп простата рагына килтереүе ихтимал.

## Тағы бер тапҡыр иғтибар!

Яман шештән тыш, ҡатын-ҡыҙҙа күкрәк биҙенең яҡшы сифатлы шеше, мастопатияның бер төрө фиброаденома ла йыш осрай. Ул гормональ дасбаланс фонында барлыҡҡа килә. Ләкин уны ябай шеш тип ҡарарға ярамай, күләме ҙур булһа, шулай уҡ хирургик юл менән алырға кәрәк. Ә инде бәләкәй күләмле икән, уны гормональ терапия ярҙамында дауаларға мөмкин. Әммә был да ҡатын-ҡыҙ өсөн даими тикшерелеп тороуға бер сигнал кеүек ҡабул ителергә тейеш.

Ҡайһы берҙә йәш ҡыҙҙар, йәшлектәренә барып, күкрәктәрендә төйөн барлыҡҡа килеүенә артыҡ иғтибар итмәй. Ҡайһы осраҡта яңылыш бөрелеп, һуғылып китеп тә онота. Һуғылыуҙан күкрәк биҙенә ҡан һауыуы, ҡан төйнәлеүе, йәғни ошо урын күгәреп тороуы (гематома) мөмкин. Бында ла гистологик анализ ярҙамында уның ниндәй шеш булыуын белергә кәрәк. Ҡан һауған, ҡан ойошҡан, тибеҙ, ә ул ҡан таралмай, шулай тороп ҡалып, берәй ваҡыт үҙенең мәкерле эшен эшләүе лә бар. Мәҫәлән, ҡасандыр кеше башы менән бәрелеп, һуғылып, унда ҡан төйнәлеп ҡалып, йәшәй-йәшәй уның яман шешкә әйләнеүе лә ихтимал. Хатта беҙ артыҡ иғтибар итмәгән һыуыҡ алдырыуҙың да

***✓ Ғаләмдә Алланан ғәйре хәрәкәтһеҙ әйбер юҡ. Ул - Мәңгелек, Хәрәкәтһеҙ, ә ҡалған бөтөн нәмә Уның тирәһендә әйләнә. Быны һин өйрәнгән физиканың бөтә ҙур һәм бәләкәй закондары раҫлай.***

яман шешкә килтереүе мөмкин. Мәҫәлән, ҡасандыр кеше пневмония менән ауырыған, дауаланмаған йәки дауаны ахырынаса алмаған, йәки бронхит менән ауырыған. Был сирҙәр тора-бара, сәләмәтлегенә бигүк иғтибар бирмәгәндә, үпкә яман шешенә килтереүе мөмкин. Ашҡаҙан сей яраһын аҙҙырһаң, ул ракка алып килә. Хәҙерге ваҡытта стресс торошон да ниндәйҙер кимәлдә яман шеш ауырыуына килтереүсе сәбәптәрҙең береһе итеп ҡарайҙар. Ҡала халҡы, саҡ ҡына һыҙлауыҡ сыҡһын, шунда уҡ табиптарға йүгерә. Ә ауыл халҡы бәләкәй генә сиқанды ла ауырыуға һанамай, уның тулышҡанын көтөп, үҙ аллы һытып, карбункулға әйләндереп, үҙ белдегенә төрлө үләндәр, дарыуҙар һалып бәйләп, үҙәге сыҡҡансы интегеп йөрөй. Беренсенән, үҙе һыҙлана, икенсенән, был шештең эсендә бит эрен йыйыла. Ҡайһы бер ваҡытта кеше тире яман шешен фурункул менән бутауы ла ихтимал. Сөнки тире рагы ла фурункул кеүек килеп сыға, симптомдары ла оҡшаш. Шуға күрә, фурункулды мотлаҡ хирургик юл менән таҙартырға, бигерәк тә ҡанды даими тикшереп торорға кәрәк. Сөнки эрен ҡанға китеп, сепсисҡа әйләнеүе мөмкин. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙың түшенә сиқкан сыҡҡан ваҡытта үҙаллы дауаланырға ярамай. Уның фурункул түгел, ә рак, хатта күкрәк биҙе сифилисы ла булыуы ла ихтимал.

### Әбйәлилдәр бәхетле!

Беҙҙең район халҡы эргәлә генә Магнитогорск ҡалаһы булыуы менән ысынлап та бәхетле. Ошо мегаполис төҙөлгәндән бирле беҙ уны үҙебеҙҙеке тип һанайбыҙ, сөнки уны төҙеүҙә ата-бабаларыбыҙ ҙа ҡатнашҡан, ауырыһалар, шунда дауаланғандар. Әле лә шулай. Әбйәлил халҡын, әгәр йүнәлтмә менән барһалар, һин Башҡортостандан, тип, кире бороп ҡайтармайҙар. Райондың онкосирлеләре уларҙа тикшереү үтә, дауалана, кәрәк икән, операция ла яһайҙар. Халыҡ өсөн, был, әлбиттә, бик уңайлы. 400 километр алыҫлыҡта булған баш ҡалаға барыуға ҡарағанда, 40 саҡырымдағы Магнитогорскиға барыуы еңелерәк тә, өйрәнелгән дә. Бөтөн нәмәне оптималләштереүгә, экономияға япһарабыҙ икән, халыҡтың финансын экономиялау тураһында ла уйларға кәрәктер. Шуға ла ауырыуҙарҙы, Силәбе өлкәһе тип тормай, Магнитта ла ҡабул итәләр икән, был дөрөҫ. Полис системаһына күсеү ҙә быға булышлыҡ итә, сөнки Рәсәй гражданы илдең теләһе ҡайһы мөйөшөндә лә бушлай дауаланыу алырға хоҡуҡлы.

Әбйәлил районында оҙаҡ йылдар врач-онколог булып эшләгән осорҙа үҙемсә яман шеш ауырыуҙары буйынса күҙәтеүҙәр яһап, уны дүрт өлөшкә бүлгәйнем. Тау зонаһы - Хәмит, Исхаҡ, Буранғол, Мәйгәште, Амангилде. Ялан яғына, әйтәйек, Хәлил, Тәпән, Һарт ауылдары инә. Күл яғынан - Ташбулат, Бикҡол, Яңауыл. Дүртенсе зона - Магнитогорскиға яҡын булған Красная Башкирия, Самар ауылдары. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙәренә генә хас үҙенсәлектәре бар. Әйтәйек, тау зонаһында ҡыҙыл үңәс, ашҡаҙан яман шеше күҙәтелә. Был уларҙың тәбиғәтенә бәйле, улар иртә тора, һуң ятә. Тау яҡтары ҡунаҡсыл, ашты эҫе көйөнсә, тоҙлоҡло, майлы итеп ашайҙар. Шул арҡала атап үткән ағзалар термик яныу алалыр, тип уйлайым. Күлдәр яғында тел, ауыҙ ҡыуышлығы, тамаҡ, тире шеше йышыраҡ осрай. Ялан яғында бауыр-бөйөр ауырыуҙары таралған. Дүртенсе зонала, Магнитогорскиҙың тәьҫиреме икән, үпкә шештәре бар.

### Үҙаллы дауаланыу

Хәҙер төрлө гәзит-журналдар бик күп. Хатта махсус рәүештә теге йәки был ауырыуҙы дауалау рецептарын баҫтырғандары ла етерлек. Ә халыҡта шундай ҡараш йәшәй: гәзиттә яҙылған икән, тимәк, ул дөрөҫ. Әммә гәзит-журналда баҫылған һәр нәмә - хаҡ, тип уйларға ярамай. Тегенән-бынан уҡып, үҙаллы дауаланыу ҡотолғоһоҙ эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Оло ғына бер ағайҙың үпкә яман шеше менән ауырығаны асыҡланғас, уның юғары белемле ҡыҙы бер гәзит тотоп килгән, бында бер төнәтмә ярҙамында ракты еңеп сығыу тураһында яҙғандар, атайыма ла шул төнәтмәне эсереп ҡарайыҡмы, ти. Минең дә йәш, тәжрибәһеҙ саҡ. Шулайтып яҙылғас, эшләп ҡарағыҙ һуң, тинем. Күпмелер ваҡыттан һуң теге ағай үлеп ҡалды, ҡыҙы минә үпкәләп йөрөнө. Шул тиклем уңайһыҙ булды. Һуңынан ошо осраҡ тураһында беҙҙең билдәле, бөйөк хирург-онкологыбыҙ, Рәсәйҙә беренселәрҙән булып Салауат хосписын асыусы Ишмырҙа Һиҙиәтовҡа һөйләнем. Һин, табип булараҡ, ауырыуҙарға үҙ белдеге менән дауаланыуҙы тыйырға тейешһең, тип иҫкәртте ул мине. Шунан алып ундай халыҡ рецептарын башта үҙем ентекләп өйрәнәм, составын ҡарайым. Һәр кемдең организмы үҙенсәлекле, берәүгә дарыу булған нәмә икенсегә ағыу булыуы ла бик ихтимал. Хатта үләндәрҙе ҡулланғанда ла ошо хаҡта онотторға ярамай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Психологтар кешенең логик фекерләү кимәлен тикшергәндә шундай һорау ҡуя: ниндәйҙер бер объектта күмәк кеше фажиғәгә тарынығыҙ, ти. Эргәгеҙҙә балағыҙ ҙа бар. Һауа аҙ, тын алып булмай. Ике кешегә бер кислород битлеге бирәләр. Уны кемгә кейҙерерһегеҙ? Күптәр, әлбиттә, балама, тип яуаплаясаҡ. Ләкин балағыҙ иҫән ҡалып, һеҙ үлһәгеҙ, ул кемдең ҡулына ҡаласаҡ, артабанғы яҙмышы ниндәй буласаҡ? Ә кислород битлеген башта үҙегеҙ ҡулланып, һуңынан балаға кейҙерһәгеҙ (артабан был алымды алмашлап эшләһәгеҙ), хәүефле ваҡыттың үтеп, икегеҙ ҙә тере ҡалыу мөмкинлеге бар. Бәлки, балалар хаҡына булһа ла, үҙебеҙҙең сәләмәтлеккә илке-һалкы ғына түгел, ә етди ҡарарға кәрәктер? Хатта күптәр тәҡдир тип ҡабул иткән яман шеш тә бит хөкөм түгел, уны ваҡытында асыҡлап, ваҡытында дауалап, табиптарҙың ҡушҡанын теүәл үтәп, ғүмереңде тиҫтәләрсә йылдарға оҙайтырға мөмкин.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

### Ҡорбан комплексынан нисек ҡотолорға?

Әгәр "аҡса аҡсаны тарта" тигән раҫлауға инанаһығыҙ икән, тимәк, инвестициялар бары тик байҙарға ғына мөмкин тип уйлайһығыҙ һәм бер нәмәгә лә аҡса һалмаясаҡһығыҙ. Шулай итеп, эш хаҡын көтөп кенә йәшәйәсәкһегеҙ.

Бөгөн миллионлаған кеше үҙен ғәйепһеҙ ҡорбан сиктәренә ҡыуалап индереп, үҙҙәренә үҙҙәре проблема тыуҙыра, үҙҙәре лайыҡ булған сәләмәтлекте, бәхетте, именлекте инҡар итә. Күрәһең, һеҙ ҙә шундайҙарҙың береһелер. Был һеҙ йорт-ерһеҙ һәм урамда йәшәйһегеҙ, эшһеҙлек буйынса түләүҙәр алаһығыҙ, тигәнде аңлатмай. Хәйер, шулай ҙа булыуы мөмкин. Әммә был бик йыш һеҙ машинаны ҡулдан алаһығыҙ, менюла осһоҙораҡ ризыҡ ҡарайһығыҙ, шулай уҡ фатир өсөн беренсе иғәнәне йыя алмайһығыҙ, балаларығыҙҙы колледжда уҡытырға аҡса тупламағанһығыҙ, пенсия тупланмағыҙ юҡ, тигәнде аңлата. Моғайын да, ҡанығыҙҙа холестерин кимәле юғарылыр, шәкәр сире менән яфаланаһығыҙҙыр, ҙур размерҙағы кейем кейәһегеҙҙер һәм хатта йөрәк өйәнәгенә дусар булғанһығыҙҙыр. Ҡабат-ҡабат төрлө уҙаҡташтар менән бер үк перспективаһыҙ бәйләнештәр булдыраһығыҙ һәм бер үк һөҙөмтәгә киләһегеҙҙер.

Бәлки, һеҙ икенсе төркөмгә - ҡомаҡ йүгереүҙәрендә ҡатнашып, еңеү яулаған, әммә ҡомаҡ кеүек йәшәгән төркөмгә ҡарайһығыҙҙыр. Был төркөм кешеләренең күпселек хыялланған яҡшы эше, килеме бар, әммә улар бының өсөн күпме көс сарыф итә. Күпме кеше эш тип сәләмәтлеген юғалта? Балаларын тәрбиәләһен өсөн сит кешеләргә күпме аҡса түләй? Бизнеста уңыш ҡаҙаныр өсөн никахын йәки башҡа шәхси мөнәсәбәттәрен тарҡата, юҡҡа сығара? Ҡәнәғәтлек килтермәгән эштәренең ҡолона әүереләме?

Әгәр һеҙҙең эш хаҡығыҙ юғары һәм бының өсөн аҙнаһына 90 сәғәт эшләп, ошо аҡсалар хаҡына яҡындарығыҙҙы иғтибарҙан мәхрүм итәһегеҙ икән, был - имен булмаған тормош. Әгәр һәр саҡ бәйләнештә булыр өсөн көнө-төнө телефонығыҙҙан айырылмаһағыҙ, был ниндәй тормош булһын инде. Ысын уңыш ниндәйҙер эш башҡарып, ул тормошоғоҙға әһәмиәт һәм мәғәнә өҫтәгәндә генә килә. "Лайыҡлы тормош өсөн" эшкә йәнең-тәнең менән бирелеү - ҡорбандың аңлы позицияһы.

